***Донъяла йәшәгән ваҡытта шатлыҡтарҙы һөйләр, ҡайғыларҙы бушатыр өсөн иң яҡын бер кешегә мохтажлыҡ була. Ата-әсәйегеҙҙән башҡа бындай яҡын кеше булмаҫ. Шуның өсөн серҙәрегеҙҙе ата-әсәгеҙгә һөйләгеҙ, серҙәрегеҙҙең хазинаһы һәр ваҡыт улар күңелендә булһын.***

**РИЗАИТДИН** нәсихәттәренән.


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

14-20 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2007 ЙЫЛ

№15 (225)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Йәштәр һөйләй..**

Ҡолаҡ һал да, фекер йөрөт!



4

**Өфө күперҙәренә...**

исем ҡушайыҡ



5

**Хоҙай инселәгән бүләктер**

көй сығарыу...



9

**Ҡурайсы, бейеүсе, өҙләүсе-**

бер кешелә ошо тиклем һәләт!



16

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ**

14-15





*Сәфәремдең төп урынына яҡынлашҡан һайын тәүҙә бер нимәгә ҡарамай башҡорт телен өйрәнергә кәрәклеген аңланым, сөнки бөтөн почта һәм юл станцияларында ямщиктар ҙа, крәҫтиәндәр ҙә үҙ-ара фәҡәт башҡортса ғына һөйләшә. Тел белеү эшмәкәрлегемдең төп шарты буласағына төшөнгәс, бөтөн көсөмдө һалып телде өйрәнергә ныҡлы ҡарар иттем.*

А.И. ВЕРЕТЕННИКОВА. "Земство табибы яҙмалары".

ОҺО, ЯҠШЫ ХӘБӘР!

# АҠ БАТША БИРГӘН ГРАМОТА

## булмышыбыҙҙы раҫлаусы документ ул





**Башҡорт ырыуҙарының XVI быуатта Рус дәүләтенә ҡушылыуы ниндәй тарихи документтарҙа һәм архив материалдарында теркәлеп һаҡланған һуң? Быға тиклем беҙ был хаҡта асылда "Башҡорт ырыуҙары шәжәрәләре"ндә генә уҡып белә алдыҡ. Башҡорт халҡының һәм иленең йәшәйешен тәьмин иткән тарихи килешеү хаҡындағы документты табыу һәм шул иҫтәлекле көндәрҙең шаһиты булыу һәр бер тарихсының ғына түгел, халҡының үткәненә, бөгөнгөһөнә һәм киләсәгенә битараф булмаған һәр кемебеҙҙең күптәнге хыялы ине. Ниһәйәт, был хыялыбыҙ тормошҡа ашты, тарих бите беҙгә йылмайып баҡты.**

**Башҡорт дәүләт университеты профессоры, тарих фәндәре докторы, кафедра мөдире Нәзир Ҡолбахтин үҙенең аспиранттары менән Мәскәүҙең Үҙәк дәүләт архивында һәм "Башҡорт аймағы" журналының 1925 йылда 3-сө һанында республикабыҙ йәмәғәтселеге, барлыҡ Рәсәй халҡы өсөн сенсация булырҙай күп һандағы документтарға юлыға. Гәзиттең был һанында килтерелгән ике документа аңлатмаларҙы тарих фәндәре докторы Нәзир ҠОЛБАХТИН бирҙе.**



(Дауамы 6-сы биттә).

ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ

# БАЙРАМҒА ӘҘЕРЛӘНЕҮ -

## ул һәр көнөбөҙ ныҡышмалы хеҙмәт, тигән һүҙ



**Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов 2007 йылдың 10 апрелендә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны. Республика башлығының Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуҙың 450 йыллығын байрам иткән 2007 йылда республикабыҙҙың сәйәси-иҡтисади, социаль-мәҙәни үҫеш тенденцияларын билдәләгән был үтә лә мөһим сығышының тулы варианты матбуғатта баҫылды. Беҙ иһә Башҡортостан Президенты телмәренең айырыуса иғтибарға лайыҡ өлөштәрен - тезистарын тәҡдим итәбеҙ.**

**Йылдың мөһим байрамы**

● Дүрт быуат элек ата-бабаларыбыҙҙың яҙмышыбыҙҙы хәл иткән аҙымы тыуған яғыбыҙҙың артабанғы тормошон билдәләгән. Башҡортостандың бөгөнгө барлыҡ ҡаҙаныштары, бөгөнгө уй-ниәттәребеҙ һәм өмөт-ышаныстарыбыҙ шуның менән бәйле.

● Төп эш баш ҡалаға тура киләсәк. Ләкин башҡа район һәм ҡалаларҙа ла күп нәмә эшләргә кәрәк буласаҡ. Уларҙы биҙәүҙе һәм төҙөкләндереүҙе планға ярашлы алып барырға, быны ң өсөн үҙебеҙҙең һәм сит ил оҫталарын, махсуслашҡан институттарҙы киңерәк йәлеп итергә кәрәк.

**Федератив мөнәсәбәттәр**

● Бөгөн Рәсәй Федератив мөнәсәбәттәрҙең яңы кимәленә сыҡты - ул социаль-иҡтисади үҫештә төбәктәрҙең үҙаллылығын һәм яуаплылығын сифат йәһәтенән күтәреү.

● Республика мәнфәғәттәрен сит илдәрҙә ныҡлыраҡ яҡларға, хеҙмәттәшлек тураһындағы халыҡ-ара һәм төбәк-ара килешеүҙәр ҡеүәтен һөҙөмтәле файҙаланырға кәрәк. Бөгөнгө Рәсәйҙәге беҙҙең Башҡортостан кеүек Федерация субъекттары донъя аренаһында лайыҡлы урын алырға тейеш.

● Федераль Йыйылыш менән үҙ-ара һөҙөмтәле эш итеү, төбәктәрҙең закон сығарыу инициативаларын "иғтибарһыҙ ҡалдырыу" практикаһын юҡҡа сығарыу проблемаһы мөһимлеген һаҡлап ҡала. Дәүләт Думаһындағы комитеттар һәм фракциялар менән тығыҙыраҡ хеҙмәттәшлек итергә, Федераль йыйылыштағы депутаттарыбыҙҙы һәм вәкилдәребеҙҙе республика мәнфәғәттәрен яҡлауға әүҙемерәк йәлеп итергә тәҡдим итәм.

**Иҡтисад, сәнәғәт**

Тулайым төбәк продукты элгәре йыл менән сағыштырғанда 7,7 процентҡа, ә 2000 йылға ҡарата 1,5 тапҡырға артҡан. Был 2010 йылға тулайым төбәк продуктын икеләтә арттырыу бурысына тулыһынса тап килә! Сәнәғәт етештереү күләме 6 процентҡа, ауыл хужалығы продукцияһы - 9, ваҡлап сауҙа итеү әйләнеше 24,8 процентҡа артҡан. 1 миллион 700 мең квадрат метрҙан ашыу торлаҡ төҙөлгән. Беҙҙең торлаҡ төҙөлөшөндә һуңғы 13 йыл эсендә был иң юғары һөҙөмтә. Тышҡы сауҙа әйләнеше 8 миллиард АҠШ долларынан ашты.

Машиналар эшләүҙә бер нисә эре проект тормошҡа ашырыла. Шуларҙың иң әһәмиәтлеһе - Австрия фирмаһы менән берлектә Рәсәйҙә ҡеүәте 150-200 ат көсө тәшкил иткән тәүге сериялы трактор етештереүҙе ойоштороу. "НефАЗ"да Нидерландтар партнерҙары менән берлектә бөтә параметрҙар буйынса заманса ҡала һәм туристик класс автобустары сығарыу үҙләштерелде. Ярҙамсы станциялар һәм электр станциялары өсөн эре комплексы ҡоролмалар йыйыу буйынса Рәсәйҙә тәүге ҙур ҡеүәтле трансформаторҙар етештереү буйынса завод төҙөлә.

● Республиканың конкурентсә ция өҫтөнлөктәре тулы ҡеүәтендә тормошҡа ашырылмай. Инвестициялар, нигеҙҙә, ҙур ҡалаларҙа, химия, нефть химияһы предприятиеларында, көсләп асыу инфраструктураһында тупланған.

● Төҫлө металлургияла минераль-сеймал базаһын тулыландырыуҙы тәьмин итергә кәрәк. Ул Учалы һәм Йәштәр ер аҫты рудниктарын үҫтереү. "Яңы Сибай", "Юбилей", "Ҡамаған" һәм Подольск яткылыҡтарын үҙләштереү. Хәйбулла тау компанияһына һоро тимер мәғдәнен эшкәртеү өсөн участка булдырыу кәрәк.

**Ауыл хужалығы һәм ер реформаһы**

● Беҙҙең өсөн ауыл ышаныслы аҙыҡ-түлек сығанағы ғына түгел, шулай уҡ ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, телде һәм мәҙәниәтте һаҡлап ҡалыу нигеҙе лә.

● Илдә тәүгеләрҙән булып оптималь нормативҡа сыҡтыҡ - бер кешегә 1 тонна иген етештерҙек. Шәкәр сөгөлдөрөнән рекордлы уңыш алынды - 3 миллион 850 мең тонна, гектарынан уртаса уңыш - 240 центнерҙан ашыу. Көнбағыш орлоғо уңышы 143 мең тоннанан ашыу тәшкил итте.

● Буш торған малсылыҡ бинаһары файҙаланылырға тейеш. Малсылыҡ продукцияһы етештереүҙе 2010 йылға 30 проценттан ашыуға арттырырға кәрәк. Шуға күрә малсылыҡты үҫтереүҙең республика программаһын кисекмәҫтән ҡабул итеү зарур.

● Ауыл хужалығы тәғәйенләшендәге ерҙәрҙә участкаларҙы бушлай хосусилаштырыуҙы берҙәм үткәреү зарур. Был йәһәттән халыҡ әлегә күп нәмәне белмәй.

**Муниципаль реформа**

● Урындағы үҙидара органдары, үҙ сиратында, финанс-иҡтисади база булдырыуға ҡарашты тамырынан үҙгәртергә тейеш. Финанслау сығанаҡтарын ныҡышмалы эҙләргә һәм табырға, яңы предприятиелар асырға һәм ғәмәлдәгеләрен үҫтерергә, эшҡыуарлыҡҡа һәм ҡулланыусылар кооперацияһына булышлыҡ итергә кәрәк.

● Муниципалитеттарҙың тәүге йыл эшләү йомғаҡтары, дөйөм алғанда, уларҙың йөкмәтелгән бурыстарҙы тулыһынса үтәп сығыуын күрһәтте. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың бер өлөшө элеккесә, йәғни республика елкәһендә йәшәй һәм нәмә булһа ла үҙгәртергә тырышмай. Бөгөнгө талаптар шундай: эшләргә теләгән һәм акса эшләй белгән муниципаль берәмектәргә генә ярҙам күрһәтеләсәк.

**Торлаҡ, транспорт**

● Торлаҡтың баҙар хаҡын кәметеү һәм халыҡтың киң ҡатламдары тарафынан уға эйә булыу мөмкинлеген тәьмин итеү өсөн беҙҙең Мөрәжәғәтнамәлә тотош саралар комплексы тәҡдим ителә.

● Ҡалаларҙа 1 мең кешегә 200-ҙән ашыу автомобиль тура килә, ә юл-транспорт инфраструктураһы ни бары 60-100 берәмеккә иҫәпләнгән.

**Йәшәү кимәле, демография, мәғариф**

● Беҙҙә эшләүсе халыҡтың бер өлөшөнөң эш хаҡы йәшәү минимумынан түбән булыуы бер ҙә тынысландырмай.

● Балалар балалар йортонда түгел, ғаиләлә тәрбиәләнергә тейеш.

● Башҡа төбәктәр менән сағыштырғанда беҙҙә имен демографик хәл күҙәтелә. 2000 йылдан башлап тыуым арта. Ләкин үлем дә юғары булып ҡала. Эшкә һәләтле йәштәге кешеләрҙең үлеүе айырыуса борсолдора.

---

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

## "Күп кәрәкһә, Горькийҙан ал..."

**Меценат, С.И. Ожегов билдәләүенсә, сәнғәт, фән, әҙәбиәт эшмәкәрҙәренә, ҡытлыҡ кисереүселәргә матди ярҙам күрһәтеүсе.** Боронғо Римдә Меценат исемле кеше булған. Ул император Августың дипломатик, сәйәси һәм башҡа шәхси йомоштарын үтәгән. Меценат шиғыр яратҡан һәм шағирҙарға һәр саҡ матди ярҙам күрһәткән. Уның исеме хәҙер Ожегов әйткән мәғәнәләге күренеште аңлатыусы һүҙгә әүерелгән.

Батша Рәсәйендә, меценатлыҡ - дворянлыҡтың әхләҡи бурысы, тип һанауһылар аҙ булмаған. Билдәле булыуынса, пролетар яҙыусы Алексей Пешков (Максим Горький) билдәле фабрикант, мануфактура өлкәһендәге эре капиталист Савва Тимофеевич Морозовтың (1862 - 1905) матди ярҙамы арҡаһында яҙыусылыҡ менән иркенләп шөғөлләнеү мөмкинлегенә эйә булған.

Белеме буйынса химик Савва Морозов замандаштары араһында әҙәбиәт, сәнғәтте ихлас яратыусы булараҡ билдәләлек алған. Фабрикант-миллионерҙың XX быуат башы революционерҙары эшмәкәрлеген финанслауы ла сер түгел. РСДРП-ның Германияла үткән тәүге съезынан һуң, мәҫәлән, В. Ульянов унан 10 мең аҡса һорап ала.

Партия һәм дәүләт эшмәкәре, төрлө йылдарҙа сәнәғәт һәм сауҙа, юл хәрәкәте, тышҡы сауҙа наркомдары вазифаһын башҡарасаҡ Л.Б. Красин революцияның ойоштороу эштәрен башҡарыу өсөн аҡса һорап, Савва Тимофеевичҡа мөрәжәғәт итә. Аҡса иҫәбен яҡшы белгән капиталист Красиндан:

- Йылына 20 мең булһам, етерме? - тип һорай.

- Егерме дүрт мең булһа, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине, - тип әрһеҙләшә революционер.

- Күберәк кәрәк булһа, - ти ҡыҙа төшкән миллионер, - Горькийҙан һорап алығыҙ. Ул, ана, 2 тингә извозчик яллай ҙа, сәй өсөн 50 тин биреп китә. Сөнки аҡсаны үҙ кеҫәһенән түгел, ә минең кеҫәнән тотона.

Тамара ҒӘНИЕВА.

---

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Президент Мөрәжәғәтнамәһе "Башҡортостандың Рәсәй менән берҙәмлегененң 450 йыллығын билдәләгән йылда - социаль үҫештең яңы үрҙәренә" (Республикалағы хәл һәм 2007 йылда уны үҫтереүҙең төп йүнәлештәре тураһында) тип атала. Мөрәжәғәтнамәнән күренеүенсә, Рәсәй кимәлендә үтәсәк байрам йылында Башҡортостан Республикаһы асылда үҙенең киләсәге өсөн фиҙаҡәр хеҙмәт менән билдәләй. Байрам ғына түгел 2007 йыл беҙҙең өсөн. Ошоға ишаралар Президент сығышында.**

---

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов бер төркөм хеҙмәт алдынғыларына хөкүмәт наградалары тапшырҙы. Сифатлы продукция етештереүсе предприятиелар ҙа премиялар менән бүләкләнде.

✓ Наркотиктар әйләнешенә контроллек итеү буйынса федераль хеҙмәттең директоры бойороғо менән Башҡортостан Республикаһы Президенты ведомствоның наградаһына лайыҡ булды.

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов күптән түгел булып үткән хөкүмәт ултырышында ағас ресурстары баҙарындағы хәл менән ҡәнәғәтһеҙлек белдерҙе. "Бөгөн күп райондарҙа ылыҫлы эшлекле ағас арзанға ғына - бер кубометры 90-95 һумға ғына һатыла. Волга буйы федераль округында беҙҙең ағас иң арзаны", тине Рафаэль Ибраһим улы. Урман эшкәртеү сәнәғәтенә инвесторҙар йәлеп итеү, булған пилорамалар эшенең һөҙөмтәлелеген күтәреү тураһында ла һүҙ булды.

✓ Башҡортостан күргәҙмәләр комплексында оло мәғариф форумы- VII "Мәғариф, Фән. Карьера" күргәҙмәһе асылды. Күргәҙмәлә төрлө уҡыу йорттары, заманса уҡытыу технологиялары, яңы һөнәрҙәр, программалар, уҡыу әсбаптары, ғилми баҫмалар менән танышырға мөмкин.

✓ "Йыл уҡытыусыһы" республика конкурсында Ишембай ҡалаһының 12-се лицей уҡытыусыһы Гүзәл Мортазина еңеп сыҡты.

✓ 16-22 апрелдә республиканың бөтә ҡала-райондарында иммунизация буйынса Европа аҙналығы үткәрелә. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһының Европа бюроһы тәҡдиме менән Европа илдәрендә, шул иҫәптән Рәсәйҙә үткәрелгән сараның маҡсаты - вакцина ярҙамында йоғошло сирҙәрҙе иҫкәртеү. Быйыл В гепатиты вирусына, ҡыҙамыҡ, грипка һәм полиомиелитҡа ҡаршы 1500000 прививка эшләнәсәк.

✓ Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау һәм кеше именлеге буйынса Федераль хеҙмәттең БР буйынса идаралығы мәғлүмәте буйынса, былтыр алкоголле эсемлек етештереүсе 2647 предприятие һәм 2183 эсемлек төрө тикшерелгән. Продукцияның 7,5 процентының сифат һәм гигиена талаптарына тап килмәүе асыҡланған, бик күп продукция һатыуҙан алынған.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# Ауырыу йәмғиәт,

## йәки Геннадий Онищенко ғына илебеҙҙе эскелектән арындыра алырмы?

**Уянам да уйланам, йәмәғәт! Эсергәме, эсмәҫкәме, тип баш ватам. Аңлағанһығыҙҙыр инде, һүҙ сәй йәки һыу тураһында бармай. Күңелдәрҙе елкендергән, "ҡайғылының ҡайғыларын тараткан, һөйкөмһөҙгә һөйкөмләрәк ҡараткан, кеҫәләрен әйләндергән һарандың, йомоҡтарҙың телен асҡан келт итеп, сатандарҙы бейеткән ер һелкетеп, егеттәрҙе ҡыйыш-мыйыш атлаткан, бабайҙарҙың таяҡтарын ташлаткан"... хәйер, Мостай ағайҙың ошо һүҙҙәренән һуң бөгөн һүҙҙең ниндәй эсемлек хаҡында барғанын төшөнгәнһегеҙҙер.**

"Араҡы" тип йөрөтһәк тә, уның халыҡ араһында таралған атамалары бихисап. Берәүҙәр "шайтан һыуы", тей, икенселәре иһә - "ожмах эсемлеге". Нисек кенә исемләһәләр ҙә, уның асылы бер үк - һыу ҡушылған спирт. Әлбиттә, араҡы етештереүселәр бөгөн спиртка "махсус рәүештә таҙартылған һәм эшкәртелгән" һыуҙан башҡа шәкәр, бал, башҡа төрлө тәмләткестәр өҫтәй, ялтырауыҡлы этикеткалар йәбештерелгән матур шешәләргә ҡоя һәм төрлө исемдәр бирә. Әммә эсемлектең мәғәнәһе үҙгәрмәй - ул иҫертер һәм башты әйләндерер, күңелде күтәрер һәм йөрәкте елкендерер өсөн тәғәйенләнгән. Уйлап ҡараһаң, араҡынан артыҡ ҙур бәлә юҡ һымаҡ... Бер танышым әйтмешләй, һәйбәт компания-ла, яҡшы закуска менән сифатлы араҡыны әллә күпме эсһәң дә, бер нәмә лә булмай. Кешегә бит ваҡыты-ваҡыты менән ял итеп, күңел асып, төрлө уй-фекерҙәрҙән, йәғни стрестан арынырға кәрәк. Әлбиттә, бының өсөн спорт менән шөғөлләнергә мөмкин - футбол уйнарғамы шунда, әллә бассейнда йөҙөргәме, һис юғында, музейғамы, филармонияғамы барырға була. Ләкин күптәр фекеренсә, иң уңайлыһы - магазинға барып, берәй шешә алып, яңғыҙ эсмәҫ өсөн шешәләштәр табыу һәм... Был һөйләмде, хөрмәтле йәмәғәт, һәр берегеҙ үҙ тормош тәжрибәһенән сығып дауам итерһегеҙ, тип ышанам.

Эсмәгән кеше юҡ! Дөрөҫөрәге, Рәсәйҙә бөгөн эсмәгән, йәғни араҡыны ауыҙына бер ҙә ҡабып ҡарамаған әҙәмде көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә табып булмайҙыр ул. Ә сабыйҙар, тиерһегеҙ. Уларҙың да күбеһе бит араҡыны әсә һөтө менән тәмләп ҡарай. Ә ҡулына бокал тоторға эшкингән балаларға иһә етештереүселәр "Балалар шампаны" тигән эсемлек әҙерләп ҡуйған. Әлбиттә, уның составында спирт юҡ. Әммә балалар бокалдарға ҡойоп сәкәштереп эсергә, тостар әйтергә өйрәнә, йәғни эскелек "культура"һына, атлай башлағандан уҡ ылыҡтырыла.

***Француз ғалимы Моррель бер ғаиләнең эскелек менән мауыҡҡан дүрт быуынының тормошон күҙәткән. Бына уның тикшеренеүҙәренең һөҙөмтәһе: "Тәүге быуын вәкилдәре әхлаҡи яҡтан боҙоҡ, артығын эсә ине, - тип яҙа ғалим. -Икенсе быуындағылар артығын эсте, өсөнсө быуын вәкилдәре ипохондрия, меланхолиянан яфаланды, кемделер үлтереүгә, үҙ-үҙен дә үлтереүгә һәләтле ине. Дүртенсе быуындағылар башлыса аңра, ахмаҡ булды, түлһеҙлек өҫтөнлөк итте". Ғалим был күҙәтеүҙәренән һуң шундай һығымта яһай: эскән кеше һәм уның тоҡомо ер йөҙөнән юҡ ителә.***

Ғөмүмән, эскелектең Рәсәйҙе солғап алғанын минһеҙ ҙә яҡшы аңлап тораһығыҙҙыр. Был "социаль сир"гә башҡалары - түбән эш хаҡы, эшһеҙлек (бигерәк, ауыл ерендә) килеп ҡушылыуын иҫәпкә алһаҡ, билдәһеҙлекте һәм дөйөм социаль апатияны өҫтәһәк, эскелектең тап беҙҙең илдә айырыуса көслө төҫ алғанын бер ни тиклем аңлатырға мөмкин. Эскелектең халыҡҡа ниндәй оло бәләләр килтергәнен тулыһынса һүрәтләү өсөн гәзит бите генә етмәҫ. Ғаиләләрҙең тарҡалыуы, һуғыш һәм үлтерештәр, янғын сығыуы, кешеләрҙең ауырыуы һәм балаларҙың етем ҡалыуы - быларҙың барыһы ла күп осраҡтарҙа тап ана шул "йәшел йылан" менән бәйле. Ошо мәҡәләне уҡыусы һәр бер кеше үҙенең, туғандарының, күршеләренең, йәки таныш-тоноштарының тормошонан сәстәр үрә торорлоҡ миҫалдар килтерә аласағына шигем юҡ. Араҡынан бөгөн берәү ҙә азат түгел - көн һайын миллионлаған доллар менән эш иткән эре эшҡыуар ҙа, аҡсаһын икмәктоҙға тартып-һуҙып саҡ еткергән пенсионер ҙа. Хатта бер ҡайҙа ла эшләмәгән, йәшәр урыны булмаған асарбаҡ та спиртлы эсемлеккә аҡса таба - буш шешә тапшырыпмы, һораныпмы, урлапмы, талапмы, - барыбер. Парадокс?! Байҙарҙы аңларға мөмкин - уларҙың аҡсаһы күп, ҡайҙа итергә лә белмәйҙәр, шуға ла эсәләр, тиергә була. Ә һуң ярлылар? Тапҡан аҡсаһын ҡыҫып тотоп, ғаиләһенә алып ҡайтыу урынына магазинға, араҡы артынан йүгерәләр бит. Бәлки эш тап уларҙың етешһеҙ йәшәүҙәрендәлер, йәғни аҡсаның араҡынан башҡаға етмәүендәлер?

Рәсәйҙә эскелек булды, бар һәм буласаҡ, уның менән бер нәмә лә эшләп булмай, тип әйтеүселәр фекерен тыңлап ҡарайыҡ. Ысынлап та, бөйөк кенәз Владимир, йәнәһе, Исламдан айырмалы рәүештә шарап эсергә рөхсәт биргәне өсөн Рәсәйгә христиан динен индереүҙе һайлаған, тигән легенда ла бар. Ә, мәҫәлән, төньяҡ халыҡтары - чукчалар, сахалар, эвенктар һ.б. араҡы эсергә, ул ерҙәргә урыҫтар килгәс кенә, өйрәнгән, имеш. Урыҫ халҡы быуаттар буйына араҡы һемерһә лә, бөтмәй, юҡҡа сыҡмай. Ә өҫтә әйтеп үтелгән милләттәр иһә араҡыны бер тапҡыр эсеп ҡарағандан уҡ алкоголикка әүерелә һәм һөҙөмтәлә күпләп ҡырыла. Эш ҡайһы бер милләт вәкилдәренең организмдарында ниндәйҙер бер ферменттың булмауында, ти ғалимдар. Йәнәһе, урыҫтарҙа ул фермент бар, ә башҡаларҙа - юҡ. Бер нисә йөҙ йыл буйына эскән халыҡ бөгөн дә араҡынан баш тартмай, тимәк, яҡын киләсәктә лә эскелектән арынырға уйламай, тип фаразларға була. Хатта араҡыны "милли эсемлек" тип иғлан итергә тәҡдим итеүселәр ҙә юҡ түгел. Хәйер, эш биология һәм анатомияла ғына түгелдер.

"Социаль сир" тип атағайныҡ бит әле эскелекте. Тимәк, ул ҡайҙандыр барлыҡҡа килгән, кемдәндер йоҡҡан. Тимәк, унан арыныр өсөн айырым кешеләрҙе генә түгел, тотош йәмғиәтте дауаларға кәрәк. Уныһы нисек була инде, тиерһегеҙ. Беҙ бит ҡунаҡсыл халыҡ, нисек итеп эскелектән арыныу маҡсатында ҡунаҡ саҡырыу, яңы әйберҙәрҙе - машинаны һәм фатирҙы, күлдәкте һәм салбарҙы һ.б. "йыуыу", тыуған көндәрҙе, юбилейҙарҙы, бала табыуҙы һәм башҡа бик күп ваҡиғаларҙы байрам итеүҙән баш тартырға мөмкин һуң?

Был мәсьәләнең икенсе яғы ла бар бит әле. Араҡы етештереү һәм һатыу дәүләт ҡаҙнаһын тултырыуҙың мөһим бер статьяһы. Асылда, Рәсәй бөгөн нефть, газ һәм араҡы иҫәбенә йәшәй булып килеп сыға. Халыҡ араҡы эсеүҙе ташлаһа, ҡаҙнабыҙ бүҫкәреп ҡаласаҡ. Бюджет ойошмаларында эшләүселәргә эш хаҡы, оло йәштәгеләргә пенсияны, балаларға пособиеларҙы ҡайҙан алып түләрбеҙ икән? Эскелек илебеҙгә бер яҡтан оло, баһалап бөткөһөҙ зыян килтерһә, икенсе яҡтан, уға сик ҡуйыу ҙа файҙаға булмаясаҡ.

Үткән аҙнала Роспотребнадзор башлығы Геннадий Онищенко йәмәғәтселек иғтибарына күләмле бер документ тәҡдим итте. Уға ярашлы, Рәсәй халҡы һуңғы ун ете йыл эсендә өс тапҡырға күберәк эсә башлаған. Йәғни, 1990 йылда һәр бер кешегә йылына уртаса 5 литр ярым спиртлы эсемлек тура килһә, хәҙер иһә - 15 литр! Был "абсолют алкоголь" иҫәбе менән. Беҙ ҡулланып өйрәнгән ярты литрлыҡ шешәләр менән иҫәпләһәк иһә, һәр бер кеше, яңы тыуған сабыйҙарҙан алып ҡарттарға тиклем, йылына 78 "поллитр"ҙы бушата ла баһа! Шуныһы айырыуса ҡурҡыныс - эскелек "йәшәрә", хәҙер алкоголиктар араһында 12-14 йәшлектәр ҙа күбәйә. Һуңғы йылдарҙа һыра һәм төрлө спиртлы коктейлдәр менән бер рәттән, араҡы етештереү ҙә арта бара икән. Йәғни, икенсе төрлө әйткәндә, Рәсәйҙә кеше һаны йылдан-йыл кәмей, ә халыҡ ҡулланған спиртлы эсемлектәр күбәйә генә. Ғәжәп хәлме? Ул ғына ла түгел, араҡы күп булһа ла, төрлө суррогаттар, йәғни, составында спирт булыуға ҡарамаҫтан, эсергә яраҡһыҙ шыйыҡсалар ҡулланыусылар һаны ла кәмемәй. Киреһенсә, арта ғына. Тағы ла бер әтнәкәһе бар дөйөм эскелектең - баҡтиһәң, һуңғы йылдарҙа араҡы күпкә арзанайған икән. 1990 йылдар менән сағыштырғанда, әлбиттә. Ул саҡта уртаса эш хаҡы 150 һум булһа, араҡы яҡынса 5 тәңкә тора ине. Йәғни, айына бер кеше 30 шешә алыу мөмкинлегенә эйә булған. Хәҙер иһә араҡының хаҡы яҡынса 100 тәңкә. Утыҙға ҡабатлаһаҡ, 3 мең һум килеп сыға. Ә бит бөгөн бик күптәрҙең эш хаҡы 10-15 меңгә барып етә.

Геннадий Онищенко фекеренсә, спиртлы эсемлектәрҙе законһыҙ етештереүселәр һәм һатыусылар менән көрәшеү һәм шулай уҡ мәктәптәрҙә араҡының зарары тураһында махсус дәрестәр индереү илде солғап алған алкоголизмдан ҡотолорға ярҙам итәсәк. Ай-һай! Беҙҙең илдә 1914 йылда Николай Икенсе, 1941 йылда - Иосиф Сталин, ә 1986 йылда иһә Михаил Горбачев "ҡоро закон" индереп ҡараны. Ярҙам итмәне. Халыҡ эсеүен дауам итте. Магазиндарҙа булмаһа, көмөшкә ҡыуҙы, "Тройной" одеколон һәм быяла таҙартҡыс һемерҙе, аптекаларҙағы төрлө спиртлы төнәтмәләрҙе ҡалдырманы...

**Эскелектән сығыу юлы бармы һуң, тип һораһығыҙ. Әлбиттә! Һәр кем үҙе теләп араҡы эсеүҙән баш тартһа, уны йәмғиәт хуплап ҡабул итһә, магазин кәштәләре шешәләрҙән һығылып торған хәлдә лә халыҡ айыҡ тормошҡа сығасаҡ. Ә дәүләттән бер генә ярҙам кәрәк - халыҡта киләсәккә өмөт уятыу, йәғни эш менән тәьмин итеү һәм илдә тотороҡлолоҡ булдырыу. Юғиһә, быуаттар буйына эскән халыҡтың организмы ла бер саҡ сыҙамаясаҡ. Башҡалар хаҡында иһә һүҙ ҙә юҡ.**

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Быйыл Башҡортостанда "Пятерочка", "Полушка", "Оптимаркет", "Семь копеек", "Монетка" кеүек 60-лап эконом-класлы магазиндар асыласаҡ. Бындай сауҙа нөктәләре башҡаларға ҡарағанда арзаныраҡ аҙыҡ-түлек һатылыуы менән айырылып тора.

✓ Быйыл республиканың 47 районына ташҡын хәүефе янай. Ағиҙел йылғаһы бассейнындағы йылғаларҙың һыу кимәле 0,3-1,7 метрға тиклем күтәрелеүе ихтимал.

✓ Быйыл яҙғы сәсеү эштәре өсөн республика бюджетынан 230 миллион һум аҡса бүленгән. БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Шамил Вахитов белдереүенсә, быйыл минераль ашламалар былтырғы менән сағыштырғанда ике тапҡырға, үҫемлек һаҡлау саралары өс тапҡырға күберәк бүленәсәк.

✓ "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһы ҡала-ара маршруттар менән файҙаланыусылар өсөн яңы хеҙмәт төрө тәҡдим итә. Телефон аша автобусҡа билетка заказ биреүгә абонемент карталары һатыла башланы. Яңылыҡтың асылы шул: пассажир автовокзал кассаһынан картаны алдан уҡ алып ҡуя. Шул карта ярҙамында ул үҙенә кәрәкле автобуста урын ҡалдырта ала. Тик быны автобус киткәнгә тиклем ике сәғәт алда эшләргә кәрәк. Артабан пассажир билетты кассанан сиратһыҙ һатып ала. Бындай карта пассажирға уңайлыҡтар тыуҙырып ҡына ҡалмай, күпмелер күләмдә билет хаҡына ташлама яһарға ла булышлыҡ итә.

✓ "Башавтотранс" предприятиеһы тағы бер яңылыҡ уйлап сығарҙы: микроавтобустар салонына видеокамералар ҡуйылды. Предприятиеның баш инженеры Игорь Ададуров әйтеүенсә, видеокүҙәтеү тәүлектең төрлө ваҡытында пассажирҙар һанын иҫәпләргә, шунан сығып хәрәкәт графигын төҙөргә булышлыҡ итәсәк. Унан һуң, видеокүҙәтеү водителдең һәм пассажирҙарҙың тәртибен дә көйләйәсәк. Эскән пассажирҙар камера алдында туҙынмаясаҡ, водителдәр ҙә тәртип боҙорға, эшләгән аҡсаны йәшерергә ҡыймаҫ. Унан һуң, хоҡуҡ боҙоуҙар булғанда был камера бынамын тигән шаһитҡа әйләнәсәк. Әлегә видеояҙыуҙар хәтер картаһына яҙыла һәм "Башавтотранс" серверына урынлаштырыла. Киләсәктә автобус салонындағы хәлдәр он-лайн режимында күҙәтеләсәк һәм көтөлмәгән хәлдәрҙә оператив ярҙам күрһәтергә булышлыҡ итәсәк.

***✓ Ауыл мәктәбен яҡшы яҡҡа үҙгәртеү тиҫтә йылдарға һуҙыласағын иҫәпкә алғанда, ауыл ата-әсәләренә үҙ балаларын иртәрәк, 6-9 кластан уҡ, гимназияларға, колледждарға уҡырға биреүҙе кәңәш итергә кәрәк.***



*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# ТЕХНИК ҺӨНӘРЛЕ...

## етмеш һөнәрле ул



**Бөгөнгө ауыл мәктәбен тамамлаусы уҡыусыларға профессиялар теҙмәһен яҙырға ҡушһаң, ул ни бары 20-25 һөнәрҙе атай ала. Улары ла шофер, табиб, уҡытыусы, милиционер кеүектән ары китмәҫ. Беҙҙең балаларҙың күберәк ошо һөнәрҙәрҙе, бигерәк тә гуманитар йүнәлешлеләрен генә һайлауына, бәлки, уҡыу йорттары, төрлө һөнәрҙәр тураһындағы мәғлүмәтһеҙлек тә сәбәпселер. Ошоно күҙ уңында тотоп, Өфө уҡыу йорттары менән быйыл иртәрәк таныштыра башларға булдыҡ. Бөгөн беҙҙә ҡунаҡта - Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжы директоры Таһирйән Мөхәммәт улы ҒӘНИЕВ. Үҙе етәкләгән уҡыу йорто тураһында һөйләй**:

- Башҡортостан иҡтисадының тос өлөшөн яғыулыҡ-энергетика комплексы тәшкил иткәс, заман талаптарына яуап биргән белем биреүсе уҡыу йорттарына һәм белгестәргә ихтыяж да ҙур. Ошо ихтыяжды иҫәпкә алып, 2003 йылдың 20 майында Рәсәй энергетика министрлығы бойороғона ярашлы, ике техникумды бергә ҡушыу юлы менән Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжы булдырылды. Эшебеҙҙең төп йүнәлеше - республикабыҙҙың яғыулыҡ-энергетика өлкәһе өсөн белгестәр әҙерләү. Беҙҙең студенттар "Башкирнефтепродукт", "Башнефтехим", "Башкирэнерго", "Полиэф", "Баштрансгаз", "Уралтранснефтепродукт" кеүек асыҡ акционерҙар йәмғиәттәрендә үҙ эш урынын таба. Белгестәрҙе "Электроэнергетика", "Теплоэнергетика", "Нефтегаз эше", "Төҙөлөш", "Иҡтисад" кеүек йүнәлештәр буйынса әҙерләйбеҙ. Һуңғы 5 йыл эсендә программабыҙға тағы 3 яңы һөнәр әҙерләүҙе кереттек.

Бөгөнгө көндә беҙҙә 5 меңләп студент уҡый. Күптәрҙә: "Уҡытыуын уҡытаһығыҙ ҙа ул, техникум тамамлағандар һуңынан эш табамы?" тигән һорау тыуыуы ихтимал. Эйе, уларҙың күбеһе эш таба. Статистика буйынса, колледжды тамамлаусыларҙың уртаса 80 проценты бер ауырлыҡһыҙ үҙ һөнәре буйынса эшкә урынлаша. Шуға беҙгә уҡырға ингәндә конкурс та юғары: ҡайһы бер һөнәрҙәр буйынса бер урынға 15 кеше һынау тота. Тамамлаусыларҙың 75 проценты тикыңғай билдәле диплом алыуы, 20 проценты "ҡыҙыл" дипломға эйә булыуы - колледж коллективының һәм студенттарҙың белем кимәле хаҡында һөйләй.

Уңыштарыбыҙ етерлек. 2005 һәм 2006 йылда, ике йыл рәттән, Рәсәйҙең Энергетика министрлығы тарафынан беҙҙең колледж илдең "Иң яҡшы 100 урта махсус уҡыу йорттары" исемлегенә индерелде. Шулай уҡ 2006 йылда Мәскәүҙә Рәсәй мәғариф форумы сиктәрендә уҙғарылған инновацион эҙләнеүҙәр конкурсында финалист-дипломант булыуға ирештек. Былтыр Башҡортостан урта махсус уҡыу йорттары араһында ойошторолған конкурста 2-се урын яуланыҡ.

Башҡорттарҙың техник вуздарға аҙ инеүе билдәле. Башҡорт зыялылары осрашҡан һайын был мәсьәләне күтәреп сыға, резолюциялар ҡабул итә. Әммә ыңғай үҙгәрештәр һиҙелмәй. Бөгөн техник профилле юғары уҡыу йорттары студенттарының дөйөм һанының ни бары 15 проценты самаһын ғына башҡорт йәштәре тәшкил итә. Әгәр ҙә башҡорт балаларының 80-85 проценты ауылда йәшәүен, ауыл мәктәбен яҡшы яҡҡа үҙгәртеү тиҫтә йылдарға һуҙыласағын иҫәпкә алғанда, ауыл ата-әсәләренә үҙ балаларын иртәрәк, 6-9 кластан уҡ, гимназияларға, колледждарға уҡырға биреүҙе кәңәш итергә кәрәк. Техник вуздарҙа быға тиклем уҡыған һәм әлеге мәлдә уҡып йөрөүсе башҡорттарҙың 95 проценты ҡала мәктәптәрен, республика гимназияларын һәм лицейҙарын, урта махсус техникум-колледждарҙы тамамлаусылар бит. Мәҫәлән, беҙҙең колледжда уҡыусы студенттарҙың яҡынса 60 проценты ауылдан сыҡҡан балалар.

Ғөмүмән, ауыл балалары араһында ла юғары белемле йәштәр күберәк булһын ине. Беҙ иһә колледжыбыҙҙа артабан юғары уҡыу йортона инерлек студенттарҙы уҡытабыҙ. Шуға ла йәштәр тырышһын, уҡырға килһен һәм инһен, киләсәктә халҡыбыҙҙың лайыҡлы инсандарына әүерелһен.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжына IX һәм XI синыфты тамамлаусылар ҡабул ителә. IX синыфты тамамлаусылар рус теленән (тест менән диктант) һәм математиканан имтихан тапшыра. XI синыфтан һуң килеүселәр һайланған һөнәргә ҡарап, химиянан йәки математиканан Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре һәм рус теленән диктант буйынса һынау тота. Көндөҙгө бүлеккә инергә теләүселәр 2007 йылдың 1 июненән алып 31 июленә, ситтән тороп уҡырға ниәтләүселәр 1 июндән алып 31 августа тиклем документтарын тапшыра ала. Имтихандар тураһында Өфө ҡалаһы, Нежинская урамы, 4-се йортта, йә 242-75-16 телефоны аша белешергә мөмкин. Шулай уҡ Ағиҙел (Берлин, 12), Баймаҡ (Юбилей урамы, 12) ҡалаларындағы филиалдарға студенттар ҡабул ителә.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# Йәштәр һөйләй...

## Ҡолаҡ һал да, фекер йөрөт!

**Март-апрель буйына Өфө тамашасыһы отҡорҙар һәм тапҡырҙар уйындары ҡарап күңелләнде. Тәүҙә мәктәптәр араһында башҡорт телендә - "Шаяниум", һуңынан Өфө урта махсус һәм юғары уҡыу йорттары студенттары араһында - "Юмора", бер аҙҙан Башҡортостан КВН лигаһының - "Юморина", 9 апрелдә иһә башҡорт һәм татар командалары араһында "Шаян-уйын" фестивалдәре уҙҙы.**

Башҡортостанда уҙғарылған КВН уйындарының исемдәре, төрлө, фәҡәт сығыштарҙың йөкмәткеһе үҙгәрмәй. Бар командалар ҙа йәмғиәтебеҙҙәге иң йәмһеҙ күренештәрҙән көлөүгә, башлыса үҙәк телевидениела барған проекттарҙы ҡабатлауға ҡора мәҙәген. Шул уҡ ҡатын-ҡыҙ, әбей булып кейенеп сығыу, енси һәм "зәңгәрҙәр"темаһын сурытыу... Әлегә беҙҙең КВН-сылар йәмғиәт өсөн мөһим, эстәлеге менән әхлаҡле идея тыуҙырыуға өлгәшә алғаны юҡ, тиергә мөмкин. Ә бит мәктәптә йә ғаиләлә генә түгел, уларҙан тыш үткәрелгән ошондай мәҙәни сараларҙа ла беҙ йәш кешене тик яҡшыға ынтылырлыҡ һәм әхлаҡһеҙлек менән түбәнлеккә ҡарата нәфрәттә булырлыҡ итеп тәрбиәләргә бурыслыбыҙ. Әгәр ҙә ниндәйҙер милләттең киләсәген юрарға ниәтләһәгеҙ, уның йәштәренең ниндәй һүҙ һөйләүенә ҡолаҡ һалыу ғына ла етә. Шуға ла республикалағы КВН-ды ойош-тороусылар әхлаҡ теҙгенен нығыраҡ тоторға тейеш.



Әлбиттә, булып үткән КВН сараларында ниндәйҙер фәһемле һүҙ әйтергә ынтылыш булды булыуға. Мәҫәлән, был юлы кемдәрҙеңдер ауыҙынан өлкәндәргә төбәп шундай һорау яңғыраны: "Бына һеҙҙең осорҙа пионер һәм комсомол, ниндәйҙер түңәрәктәр булған, улар һеҙҙе матур, әхлаҡле йәшәү рәүешенә саҡырған, ә беҙгә һыра, пепси, поп-корн менән зыянһыҙ секс ҡына тәҡдим итәләр. Йәшәүҙең мәғәнәһе ошондамы ни?"

"Башҡорт КВН-ы әле йәш, шуға уға ҡаты бәрелмәгеҙ", - тиеүселәр бар ул. Ләкин яңы шыуышырға өйрәнгән баланың етешһеҙлектәренә күҙ йомоп ҡарауҙың нимәгә килтереүен һәр тәрбиәсе белә. Ваҡытында төҙәтеү, тәүҙән үк дөрөҫ йүнәлеш биреү кәрәк. Эйе, күңелде үҫтерер маҡтау ҙа кәрәк. Мәҫәлән, ҡайһы бер командаларҙың, бигерәк тә "Беҙгә барыбер" коллективының кимәле үҫә барыуы, "ХХ Централ" командаһының ижади ҡомар менән эшләүе, берҙәмлеге, "Башҡорттар. ru", "Ығы-зығы"ларҙың да матур табыштары маҡтауға лайыҡ. Уларҙың сығыштары хаҡында беҙ "Киске Өфө"лә яҙғайныҡ инде. Булып үткән "Шаян-уйын" бәйгеһендә лә был командалар бер башҡа юғары булды, башҡаларҙан айырылып торҙо.

Ә һөҙөмтәләргә килгәндә... Сибайҙан "Ете ырыу" командаһы - "Сағыу визитка", Республика башҡорт лицей-интернатының "Башҡорттар.ru" командаһы - "Йыл юмористары", Туймазынан "IQ" командаһы - "Иң сағыу сығыш", Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала баш-ҡорт гимназияһының "ХХ централ"дары - "Иң музыкаль команда", 140-сы башҡорт гимназияһының "Ығы-зығы"һы - "Йыл асышы", Стәрлетамаҡтан килгән "Баста"лар - "Иң яҡшы шаяртыу", Өфөнөң йыйылма командаһы "Уникс Град" "Сезондың аҡһаҡалдары" номинацияларында еңеүсе тип табылды. Гран-приға иһә башҡорт йәштәренән торған "Беҙгә барыбер" командаһы лайыҡ булды. "Ығы-зығы"нан Алһыу Мурзина "Ҡатын-ҡыҙ ролен иң оҫта башҡарыусы" һәм "Башҡорттар.ru"нан Артур Ғилметдинов "Ир-ат ролен иң оҫта башҡарыусы" тип танылды.

**Шулай итеп...**

**Мәскәү КВН-ын барыбыҙ ҙа яратып ҡарайбыҙ. Унда бар тамашасы үҙ иткән командалар һәм ҡатнашыусылар бар. Оҙаҡ хәтерҙә ҡала, телдән төшмәй һөйләнеп йөрөй торған сағыу мәҙәктәр ҙә етерлек унда. Былар - КВН тигән иң мауыҡтырғыс уйындың төп ҡағиҙәләре. Башҡорт КВН-ынына ла сағыу командалар, талантлы ҡатнашыусылар һәм... оҙаҡ телдән төшмәй һөйләнеп йөрөрлөк сығыштар теләйбеҙ.**

**Марат АБДУЛЛИН.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы кәңәшмәлә социологик тикшереүҙәр һөҙөмтәләре тураһындағы мәғлүмәт менән мәғлүмәт-аналитика бүлеге начальнигы Марат Ғәзизов сығыш яһаны. Билдәләнелеүенсә, былтыр Өфө фәнни үҙәгенең Социаль-иҡтисади тикшереүҙәр институты үткәргән "Эшҡыуарлыҡ. Инвестициялар. Күсемһеҙ милек" тигән тикшереүҙәрҙә бәләкәй һәм урта бизнес менән шөғөлләнеүсе 206 һәм 881 ябай кеше респондент булараҡ ҡатнашҡан. Уларҙың яуаптарынан күренеүенсә, Өфөлә эшҡыуарлыҡ үҫеше өсөн иң уңайлы шарттар тыуҙырылған. Ләкин эшҡыуарҙар бәләкәй һәм урта бизнесҡа аяҡ салыусы сәбәптәрҙе лә барлай: улар - һалым һәм закондар системаһының камил булмауы, коррупция, бюрократик кәртәләр, баҙар хәле тураһында мәғлүмәт булмауы, һ. б.

☑ Өфө ҡала округы хакимиәтендә республиканың муниципаль райондары һәм ҡалалары хакимиәттәренең мәғлүмәт-аналитика бүлектәре етәкселәре менән семинар үтте. Хакимиәт башлығы урынбаҫары Миҙхәт Мәмбәтов әйтеүенсә, Өфө халыҡ менән мәғлүмәт эше алып барыуҙың яңы алымдары буйынса тәжрибә майҙанына әйләнә бара.

☑ Өфөлә торлаҡҡа хаҡ бер аҙ кәмей төшкән. Йыл башынан бирле 1 кв. м торлаҡ майҙанға хаҡ 1,8 процентҡа арзанайған. Ә бер бүлмәле фатирҙың 1 квадрат метрына хаҡ арта бара. Әле ул 56,68 мең һум тәшкил итә.

☑ Өфөләге 13-сө махсус коррекция мәктәбе уҡыусыһы Лиә Сәхибгәрәева, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Республика башҡорт гимназия-интернаты уҡыусыһы Сабина Күсәева БР Балалар фонды стипендиаттары исеменә лайыҡ булды.

☑ "Иммунопрепарат" филиалы директорының ғилми эштәр буйынса урынбаҫары медицина фәндәре докторы, профессор Марсель Тойғонов РФ Президентының Рәсәйҙең йәш ғалимдарын яҡлау өсөн тәғәйенләнгән грантына лайыҡ булды.

☑ **19 апрелдә Өфөнөң Октябрь районы 136-сы башҡорт лицейында үҫәргәндәр шәжәрә байрамы үткәрә. Байрам 14,00 сәғәттә башлана.**

ТӘҠДИМЕМ БАР

# Өфө күперҙәренә...

## исем ҡушайыҡ

**Йылға һәм шишмәләр, тәрән соҡорҙар һәм тарлауыҡтар, һаҙлыҡ һәм уйһыулыҡтар, юл һәм урам саттары аша һалынған күперҙәр, күперсектәр һәм виадуктар кешеләргә оҙаҡ йылдар, хатта быуаттар буйы хеҙмәт итә һәм ахырҙа емерелә, йә емерәләр.**



Боронғо Рим тарихынан билдәле булыуынса, шымартылған таштарҙан һалынған беренсе виадук беҙҙең эраға тиклем 1 быуаттың икенсе яртыһында Италияның Нарни ҡалаһы янында һалынған. Йылъяҙмала әйтелеүенсә, Рәсәйҙәге тәүге таш күпер 1367 йылда Мәскәү Кремленең Троицк ҡапҡаһы алдында Неглинка йылғаһы аша һалынған. Ә 1629 йылда Мәскәү йылғаһы аша ла таш күпер күтәрелә һәм уға Всехсвят тигән исем бирелә. Күперҙәргә исем биреү, моғайын, шул дәүерҙәрҙән башланғандыр. Мәскәүҙә Ҡырым, Костомаров, Кузнецк, Нагатин, Ҡыҙыл Пресня кеүек йәйәүлеләр, ат, машина менән йөрөү, Андреевский, Краснолужский, Новоспасский, Бородино, кеүек тимер юл күперҙәре барлыҡҡа килә. Бөгөн Мәскәүҙә 200-ҙән ашыу күпер, күперсек бар һәм уларҙың бөтәһенә лә исем ҡушылған.

Шулай ҙа күперҙәр һаны буйынса эреле-ваҡлы утрауҙарҙы төйәк иткән Санкт-Петербург ҡалаһы беренсе урында тора. Унда 800-ҙән ашыу күпер иҫәпләнә. "Петр" тип аталған тәүге таш күпер 1703 йылда Ҡуянлы һәм Ҡайынлы утрауҙарын тоташтырһа, 1715 йылда Фонтанка йылғаһы аша полковник Михаил Осипович Аничков алһыу төҫтәге граниттан өс тороҡло күпер һала. Күпергә уның исеме бирелә. Скульптор П. Клодт иһә күпер өҫтөнә "Кешенең атты ҡулға өйрәтеүе" тигән композиция эшләп ултырта.

Башҡа ҡалаларҙан айырмалы рәүештә, Петербург күперҙәре - асылмалы, айырып ҡ у й ы л м а л ы , күтәрелмәле. Ҡаланың күп һанлы йылғалары, каналдарынан судноларүтеү өсөн шулай эшләнгән ул. Тик 1850 йылда ғына инженер С. Кебедз 365 метр оҙонлоҡтағы һәм 8 тороҡло даими күпер һала. Тәүҙә ул Благовещенский, бер аҙҙан Николаевский, 1917 йылғы Октябрь революциянан һуң лейтенант Шмидт исемен йөрөтә.

Төньяк баш ҡалала Ҡ ы ҙ ы л , Күк, Йәшел, Декабрист Пестель исемендәге, Египет, Арыҫлан, Банк, Почтамт, Финляндия, Кашира, Обухов, Володарский, Комаровский, Һарай һәм башҡа исемдәге күперҙәр, күперсектәр бихисап. Ҡыҫҡаһы, Петербургты уның атамалы күперҙәренән башҡа күҙ алдына килтереүе мөмкин дә түгел.

Мәскәү һәм Петербургтың исемле күперҙәре тураһында б ә й н ә - б ә й н ә һ ө й л ә ү е м д е ң "әтнәкәһе" шунда: Башҡортостандың төп йорто Өфө лә тирә-яҡтан эреле-ваҡлы йылғалар, шишмәләр, соҡорҙар, убалар, тауҙар менән уратып алынған. Улар аша һалынған күпер, күперсек, виадуктарҙың һаны ла илленән ашыу һәм күплеге менән Урал, Волга буйы, Себер ҡалалары араһында беренсе урынды тота, тиһәм, һис тә хата булмаҫ. Әммә уларҙың береһенең дә, Мәскәү, Петербург, Киев күперҙәренән айырмалы рәүештә, әлегә исем-атамалары юҡ. Әлегә... Дөрөҫ, халыҡ телендә Ырымбур, Шаҡша, Дим, Затон, Силәбе тип йөрөтөлгән күперҙәр бар барлығын, ләкин уларҙы бер кем дә законлаштырмаған.

Бына ошо бушлыҡты тултырырға һәм Өфө, республика тарихына бәйле исемдәр ҡушырға ине уларға. Әгәр беҙ Өфө тирәләй һәм уның эсендә аҡҡан Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим, Соҡалыҡ, Шөгөр, Шаҡша йылғалары, Өфөнөң үҙендәге юлдар, урамдар, соҡорҙар аша һалынған эреле-ваҡлы күперҙәр, күперсектәр, виадуктарға исемдәр биреп сыҡһаҡ, баш ҡалабыҙ тағы ла күркәмерәк, тағы ла сағыуыраҡ күренәсәк, килгән-киткән ҡунаҡтар алдында абруйы б е р м ә - б е р күтәреләсәк, артасаҡ.

Салауат Юлаев күпере, мәҫәлән, Зәки Вәлиди, Муса Мортазин, Сабир Ваһапов (Ырымбур яғына киткән юл өҫтөндәге Ағиҙел күпере нәҡ уның юллауы һәм инициативаһы менән һалынғанлығын онотмайыҡ), Чапаев, Мостай Кәрим... исемендәге күперҙәр - насармы ни?

Әйҙә, шул хаҡта уйлашайыҡ әле. Әгәр тәҡдимем ҡулай тип табылһа һәм хөкүмәт яғынан яҡлау, хуплау менән ҡарар ҙа ҡабул ителһә, күперҙәргә ниндәй исем биреү тураһында күмәкләп хәл итергә, бәлки, конкурс та иғлан итергә булыр ине.

***Әгәр беҙ Өфө тирәләй һәм уның эсендә аҡҡан Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим, Соҡалыҡ, Шөгөр, Шаҡша йылғалары, Өфөнөң үҙендәге юлдар, урамдар, соҡорҙар аша һалынған эреле-ваҡлы күперҙәр, күперсектәр, виадуктарға исемдәр биреп сыҡһаҡ, баш ҡалабыҙ тағы ла күркәмерәк, тағы ла сағыуыраҡ күренәсәк, килгән-киткән ҡунаҡтар алдында абруйы бермә-бер күтәреләсәк, артасаҡ.***

**Ризван ХАЖИЕВ.**

ҠУЛЛАНЫУСЫ ӘЛИФБАҺЫ

# Аһ, был кредиттар!

Кредит алыу тураһындағы килешеүҙәргә ҡул ҡуйғанда, клиент тәү сиратта номиналь хаҡ менән таныша. Номиналь процент - ул ҡиммәттең аҡсалата сағылышының процент иҫәбе. Инфляция ваҡытында ысынбарлыҡҡа тап килгән иҫәп әйберҙең аҡсалата хаҡына ҡарағанда күпкә түбәнерәк була. Реаль процент иҫәбе бурысҡа аҡса биреүсенең килеме, тиһәң дә була.

Кредиттың әллә күпме юлдары бар. Уларҙың һәр береһе процент күләменә йоғонто яһай ала һәм был иҫәп рекламалаған хаҡтан күпкә айырылып тороуы мөмкин.
Миҫалдар килтереп китеү урынлы булыр. Әйтәйек, һеҙ 12 процент иҫәбе менән 100 мең һум аҡсаны кредитҡа алып торғанһығыҙ икән, ти. Тимәк, бурысты проценттары менән арттырып түләргә тейеш булаһығыҙ. Йыл аҙағына бурысығыҙ йәмғеһе 112000 һум йыйыла - 100 мең төп бурыс һәм 12 мең процент түләүҙәре. Ләкин ҡайһы бер осраҡтарҙа банк был процент хаҡын алдан һанап сығарып, һеҙгә бирелгән сумманан аванслата алып ҡала. Кредит алыусы ҡулына бары тик 88 мең һум аҡса бирелә. Был 12 проценттың фактик иҫәбен 13,6 процент күләменә тиерлек арттыра.

Банкылар аҡса эшләү өсөн йәнә бер алым ҡуллана. Иҫәп-хисапты ябайлаштырыр өсөн, бәғзе бер иҡтисад учреждениелары бер йылды 365 түгел, 360 көн тип һанай. Тимәк, кредит алыусы бурысын биш көнгә алдараҡ түләп бөтөрөргә тейеш. Шулай уҡ "ҡыҫҡартылған йыл" алымы процент иҫәбенең артыуына килтерә. Ссуданы бүлеп түләү шарты менән алған осраҡта процент иҫәбе шаҡтай үҙгәреп тороуы мөмкин.

**Шулай итеп, кредит донъяһында банкылар өсөн процент иҫәбен күтәрә торған бихисап алымдар билдәле. Был, әлбиттә, клиент файҙаһына түгел... Шуның өсөн, банкылар менән кредит мөнәсәбәттәренә инер алдынан, ете ҡат үлсәргә, иҫәпләргә кәрәк икәнен онотма.**

**Илдар ҒӘБИТОВ,**
**иҡтисад фәндәре кандидаты.**

# Аһ, был реклама!

**Бөгөнгө көндө рекламаһыҙ күҙ алдына ла килтереп булмай. Өйҙә - телевизор, урамда - баннер, хатта автобуста ла радио аша реклама. Нисек итеп рекламаның уның насар йоғонтоһонан йолоп ҡалырға? Был һорауға белгестәр шундай кәңәштәр бирә:**

1. Артыҡ ышанып бармағыҙ.

Әгәр ҙә реклама "иң яҡшыһы", "иң һәйбәте", "иң тәмлеһе" тип, "иң" һүҙен күп ҡуллана икән, үҙ-үҙегеҙгә "Ниңә?" тигән һорау ҡуйырға онотмағыҙ. Яҡшы тауар хаҡында һөйләгәндә, сифаттың артыҡлыҡ дәрәжәһен ҡулланалар икән, тимәк, уйланырға урын бар. Сөнки тауар хаҡында аныҡ ҡына әйтерлек нәмә, күрәһең, юҡ. Ныҡ рекламалаған тауар сифатлы, тигән һүҙ түгел бит. Бары тик уларҙы етештереүсенең аҡсаһы ғына күп. Һуңынан артыҡ рекламаланған ҡиммәтле әйбер өсөн һатып алыусы аҡсаһын үҙе түгә.

2. Һәр нәмәгә үҙ фекерегеҙ булһын.

Һәр рекламаның бурысы - һеҙҙән аҡса һурыу. Шуға күрә сағыу һүрәттәргә, матур көйгә иҫегеҙ китмәһен. Актерҙарҙың интонацияһына, мимикаһына иғтибар итмәү хәйерлерәк.

3. Уйлағыҙ.

Күп кенә реклама роликтары ябай ғына логикаға ла һыймай. Тормошта ундай ситуацияларҙың булмауы барыһына ла билдәле. Шулай уҡ рифмаға һалынған слогандарҙың да бер мәғәнәһе лә юҡ.

**Шулай итеп, реклама ҡарарға тура килгәндә, уйлағыҙ, һеҙҙең фекер менән идара итеүгә юл ҡуймағыҙ, артыҡ ышана һалып бармағыҙ.**

Б Ә Л Ә К Ә Й  Ҡ А М У С




**БОЛИВИЯ**

**Иң бейектәге ҡала**

Боливияның Потоси ҡалаһы 4000 метр бейек урында һалынған. Ул әллә ни ҙур түгел, ләкин ер шарындағы бөтөн ҙур ҡалалар унан күпкә түбәндә ята. Бейектәге ҡала буларак, Гиннестар китабына индерелһә лә, уның тарихы фажиғәле. XVI-XVII быуаттарҙа Потосиҙың көмөш сығарылған рудниктарында меңәрләгән индеецтар үлә. Индеецтарҙы ҡолға әйләндергән испан баҫҡынсылары көмөш сығарыу өсөн меңәрләгән индеецтарҙы шахталарға ҡыуа. Эшкә әрһеҙ, физик яҡтан көслө булыуға ҡарамаҫтан, индеецтар түҙеп тора алмаҫлыҡ ауыр шарттарҙа эшләүҙән күпләп һәләк була. Өҫтәүенә, насар ашатыуҙан күптәр аслыҡҡа түҙмәй һәм бер туҡтауһыҙ емерелгән шахталарҙа терәләй ер аҫтында ҡала улар. Ә шашып байыҡҡан испандар тау башында Потоси ҡалаһына нигеҙ һала һәм ул тиҙ арала Көньяҡ Американың сәскә атыусы матур ҡалаларының береһенә әүерелә. XVII быуатта халҡының һаны буйынса Потоси Лондонды уҙып китә.




1545-1660 й ы л д а р ҙ а испан кораблдәре 16 000 тонна көмөштө Испанияның Севилья ҡалаһына ташый һәм испан байҙарының йорттары Боливия көмөшөнән яһалған зауыҡлы һауыт-һабалар менән тула. Европаның был иленең иҡтисадын үҫтереп, илде гөлсәскәгә әүерелдергән Потоси ҡалаһы үҙе яйлап һүнә, сөнки тауҙа көмөш запасы бөтә. Ҡала бер кешеһе ҡалмаған шомло урынға әүерелә. Ул әле музей-ҡала булараҡ ҡына билдәле. Бына-бына емерелергә торған боронғо ҡоролмаларҙың ҡайһы берҙәренә инеүе лә ҡурыныс. Ҡасандыр бында бай тормош гөрләп тороуын ҡайһы бер сиркәүҙәрҙең матурлығы юғалмауынан ғына төҫмөрләп була.



***✓ Ирендең асыулы йөрөүе ғаиләгеҙгә ҡағылмаһа, ул тынысланғансы һүҙ башлама. Сабыр ғына һыуыныуын көт. Арығандыр, йәки эшендә проблемалары күбәйгәндер, тип уны аҡларға тырыш.***



ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК

# Шәмиғол хәлфә

### Уның фатихаһынан юл уңа

Миңә 1943 йылда Ырымбур өлкәһенә ҡараған Троицк ҡасабаһындағы баҙарға барырға тура килде. Ауылыбыҙ Төпсәндән ете кеше бәләкәй санаға йүкәнән ишелгән аркан, дилбегәләр тейәп, юлға сыҡтыҡ. Юлда барғанда Ишбирҙе ауылында туктап, йокларға ҡалдыҡ. Мин Шәмиғол хәлфәгә һуғылдым. Ул миңә бетеү яҙып, тоҙ өшкөрөп бирҙе. "Был әйберҙәр һинең юлыңды уңышлы итер", тине.

Икенсе көндө таң менән юлға сыҡтыҡ. Көс-хәл менән Николаевка ауылына барып еттек. Был ауылдан Троицкиға 8 км ҡала. Әсәйемдең апаһы менән бер өйгә инеп, ишек шаҡыныҡ. Инәйем русса яҡшы ғына һөйләшә. Беҙҙе яңактарын яулык менән бәйләгән оло ғына бер ир ҡаршы алды. Беҙ унан йоклап китергә рөхсәт һораныҡ. Йорт хужаһы беҙҙе өйөнә саҡырҙы. Хужабикә лә ризалыҡ бирҙе. "Тик тынғыһыҙыраҡ булыр инде беҙҙә, - тине ул. - Ирем бына бер ай инде, ҡолағы һыҙлап, башы ауыртып, яфалана, төнө буйы һыҙланып йөрөп сыға".

Ярай, бер кискә кер мейескә, тигән бит ололар. Беҙ саналарыбыҙҙы йорт хужаһы күрһәткән урынға ҡуйҙыҡ та өйгә индек. Хужалар менән һөйләшеп ултырҙыҡ. Сәй эсеп алдыҡ. Шул ваҡыт Шәмиғол хәлфә өшкөрөп биргән тоҙ иҫкә килеп төштө. Тәүҙә хужаларға Шәмиғол хәлфә тураһында һөйләнем. Шунан уның дауаһы, тип, тоҙҙо күрһәттем. Ярты стакан һыуға бер балғалак тоҙ һалып, ирегәнсе болғаттым да, йорт хужаһының ҡолағына бер-нисә тамсы тамыҙҙым. Аҙаҡ тоҙло һыуҙы үҙем бер уртлап алдым да ҡалғанын хужаға эсергә бирҙем. Уның да Шәмиғол хәлфә тураһында ишеткәне булған икән. Шуға ла Шәмиғол хәлфәнең дауаһын һис икеләнмәй ҡабул итте. Ул мейес башына менеп ятыу менән, йоклап китте. Хужабикә аптырап ҡуйҙы хатта.

Икенсе көн таң менән тағы юлға сығырға йыйына башланыҡ. Йорт хужаһы: "Улым, бөгөн төнө буйы рәхәтләнеп йокланым, рәхмәт һиңә, мең йәшә. Хоҙай миңә һеҙҙе үҙе алып килгәндер", - тине. Мин уға тағы ла бер аҙ тоҙ биреп ҡалдырҙым.

Шулай итеп Троицк баҙарына барып еттек. Баҙар бик уңышлы булды. Аркан, дилбегәләребеҙҙе һатып бөттөк. Аҙыҡ-түлек һатып алдыҡ. Бер саҡ баҙарҙан йыраҡ та түгел майҙанға самолет килеп төштө. Беҙ, баҙарҙағы малайҙар, йүгереш шул ергә. Самолеттан олпат ҡына бер ир төштө. Уны ике кеше ҡаршы алды. Улар баҙар эргәһендә генә урынлашҡан бинаға йүнәлде. Мин дә улар артынан эйәрҙем. Мине бер кем дә туктатмай. Әлеге кешеләр ингән йорт ашхана булып сыкты. Ишек төбөндә һаҡсы тора. Ул мине туктатмаҫы булды. Шул саҡ ашхана залынан килеп сыҡҡан бер гүзәл апай мине күреп ҡалды һәм төпкә үтергә саҡырҙы. Мин өҫ кейемемде сисеп, ул күрһәткән урынға ултырҙым. Өҫтәлгә ашамлыҡтар килтереп ҡуйҙылар. Шунан теге апай минең янымa килеп ултырҙы ла, исемемде, фамилиямды, ҡайҙан килеүемде һорашты. Мин ҡыйыулана төшөп, барыһын да һөйләп бирҙем. Теге апай бая самолеттан төшкән ағайға ҡарап, минең турала ниҙер һөйләне лә, мине маҡтап ҡуйҙы. Шунан ҡулыма 2 мең һум аҡса тотторҙо. Мин ни эшләргә лә белмәй, аптырап ҡалдым. Баяғы самолеттан төшкән ағай йылмайып: " Ал, ал, кәрәге тейер", - тигәс, аҡсаны алдым.

Инәйем мине юғалтып, ҡото осоп ҡунаҡхана йортонда ултырғанда 2 мең һум аҡса тотоп килеп ингәс, йөҙө асылып, шатланып китте. Беҙ тиҙ генә йыйындыҡ та юлға сыҡтыҡ. Ҡайтҡанда тағы ла Николаевка ауылында баяғы таныш урыҫтарҙа туктарға тура килде. Йорт хужалары беҙҙе үҙ туғандары кеүек ҡаршы алды. Йорт хужаһы: "Улым, һиңә ҙур рәхмәт, хәҙер башым да ауыртмай, ҡолаҡ та һыҙламай. Шәмиғол хәлфә биргән тоҙ килеште", - тине.

Шулай итеп Шәмиғол хәлфә кешеләрҙе өшкөрөп аяҡҡа баҫтырыу ғына түгел, доғалары, изге теләктәре менән юл йөрөгәндә лә, ниндәйҙер эшкә тотонғанда ла ярҙам итте. Күрәҙәлек һәләте менән күптәрҙе буласаҡ һәләкәттәрҙән ҡурсалай ине.

### Тәүбәгә килтерә

Хәлфә сирле кешене өшкөрөр алдынан һәр саҡ уны тәүбәгә килергә саҡыра торғайны: "Быңдай мәкерле сиргә юлығыуыңа үҙең ғәйепле, атай-әсәйеңдең, ололарҙың киҫәтеп әйткәнен һанға һуҡмағанһың, шуның өсөн Аллаһы Тәғәлә һиңә яҙаһын ебәргән", - ти ине.

Бер саҡ ошондай һөйләшеүгә шаһит булырға тура килде. Хәлфә Сәләхетдин тигән егетте ҡабул итеп, уға өгөт-нәсихәт уҡый башлағайны, ауырыу: "Олатай, мин ысынлап та атайым ҡушмаған эште эшләнем шул", - тип һөйләп алып китте. Хәл былай була. Сәләхетдин Хөснөтдин улы өйрәтелмәгән тайға атланып, иптәштәре алдында маһайырға ниәтләй. Атаһы: "Улым, ярамай, тай бик уҫал, баш бирмәйенсә, үҙеңде осороп төшөрөп ҡалдырыр", - тип киҫәтә. Ә Сәләхетдин үҙенекен итә. Атаһы күрмәгәндә генә ялан кәртәләге тайҙы тотоп ала ла, уға һикереп менеп ултырыуы була, тай ялан кәртәне уратып, йән фарман саба башлай. Сәләхетдин сабып барған тай өҫтөнән ҡолап төшә. Иҫен юғалтып, күпмелер ята ул. Ярай әле, әсәһе күреп ҡалып, атаһына әйтә.

Сәләхетдин аттан уңайһыҙ ҡолап, һул аяғын зәғифләгән була. Атаһы уны дауаханаға алып бара. Малай дауаханала бик оҙаҡ дауалана, ләкин ыңғай һөҙөмтә булмай. Һуңғы сиктә табиптар уның аяғын киҫеп ташларға ҡарар итә. Сәләхетдин ҡайһыға ҡала. Бер палатала ятҡан иптәше Сәләхетдингә аяғын киҫергә бирмәҫкә, Ишбирҙе ауылында йәшәгән Шәмиғол хәлфәгә барырға кәңәш итә. Атаһы ла врачтар менән килешмәй, улын дауахананан алып ҡайтып китә. Иртәгәһенә үк уны Шәмиғол хәлфәгә алып баралар. Уларҙың килеүен алдан ук һиҙеп, көтөп торған була хәлфә. Ул шунда уҡ йортонан сығып, арбала ятҡан баланы башынан аяғына тиклем һыпыра һала. Шунан: "Тор, аяғыңа баҫ, ҡурҡып ятма", - тип әйтеүе була, әле генә һыҙланыуҙан ҡысҡырып ятҡан Сәләхетдин арбанан төшөп, йәйлап атлай ҙа китә. Хәлфә Сәләхетдиндең атаһына: "Улыңды егет ҡорона еткергең килһә, тағы ла алып килерһең", - ти. Шулай итәләр. Сәләхетдин тамам шәбәйгәс, уны район дауаханаһы хирургы Мөрсәлим Абдрахман улы Кузеев ҡарай һәм дауаланыу һөҙөмтәһенә хайран ҡала.

Сәләхетдин һөйләүенән: "Хәлфә шул тиклем ихлас тәрбиәләне мине. Ул атайыма "Улың ил яҙмышын хәл итеү ваҡиғаһында ла ҡатнашыр әле", тип әйтә. Мин ысынлап та аҙаҡ Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаштым, иҫән-һау әйләнеп ҡайттым".

***Шәмиғол хәлфә кешеләрҙе өшкөрөп аяҡҡа баҫтырыу ғына түгел, доғалары, изге теләктәре менән юл йөрөгәндә лә, ниндәйҙер эшкә тотонғанда ла ярҙам итте. Күрәҙәлек һәләте менән күптәрҙе буласаҡ һәләкәттәрҙән ҡурсалай ине.***

***Хәлфә сирле кешене өшкөрөр алдынан һәр саҡ уны тәүбәгә килергә саҡыра торғайны: "Быңдай мәкерле сиргә юлығыуыңа үҙең ғәйепле, атай-әсәйеңдең, ололарҙың киҫәтеп әйткәнен һанға һуҡмағанһың, шуның өсөн Аллаһы Тәғәлә һиңә яҙаһын ебәргән", - ти ине.***

**Миңнулла ӘЛИМҒОЛОВ.**
Күгәрсен районы.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

## Иреңде бәхетле ит

**✦ Аш-һыу бүлмәң йәмле булһын**

Аш-һыу әҙерләгән бүлмәң таҙа булһын, табын өҫтәлендә һәр саҡ матур вазала сәскәләр торһон, ултырғыс, шкафтар ҙа күркәм булһын.

Өй эсендәге мебелдәрҙе ваҡыты-ваҡыты менән икенсе урынға күсереп, бүлмәләреңдең күҙ өйрәнгән биҙәлешен үҙгәртеп тор.

Бешергән ризыҡтарың һәр саҡ тәмле һәм яңы булһын. Йорттағы хужалыҡты яҡшы итеп алып барыу өсөн бүтәндәр менән тәжрибә уртаҡлаш.

Балаларҙы итәғәтле, әҙәпле мосолмандар итеп үҫтереү өсөн ниндәй тәрбиә бирергә кәрәклеген өйрән.

**✦ Ғаилә финансын һаҡлау**

Ирендең хәләл көсө менән тапҡан аҡсаһын уның ризалығынан башҡа тәләфләмә. Әгәр хупламаһа, уның аҡсаһын хәйергә лә таратма.

Ирең өйҙә юҡ саҡта йортоғоҙға, ирендең машинаһына һәм башҡа милкенә күҙ-ҡолаҡ булырға өйрән;

**✦ Яҡын мөнәсәбәттәр**

Ирендең яҡынлыҡ ҡылырға теләге көслө булһа, ҡылтымбыйланып, ҡаршылашма, ыңғайына бул, уға һөйөү һүҙҙәреңде әйт. Иреңә ҡәнәғәтлек кисереү мөмкинлеге бир.

Тәнеңдең һәр саҡ таҙа һәм хуш еҫле булыуын хәстәрлә. Яҡынлыҡ ҡылғандан һуң мотлаҡ душта ҡойон.

Енси яҡынлыҡ өсөн уңайлы ваҡыт һайларға тырыш. Аллаһы Тәғәлә биргәндең барыһына ла шөкөр ит.

Әгәр ирең ярлы кеше булһа һәм ябай эштә эшләһә, зарланма.

Ярлы, ғәрип-ғәрәбә һәм йортһоҙ-ниһеҙ урамда һоранып йөрөгән кешеләргә ҡара ла, Аллаһы Тәғәлә һиңә ни биргән, шуға шөкөр итеп йәшәргә өйрән.

Ысын байлыҡтың динле булыуҙа һәм Алла юлынан барыуҙа икәнлеген онотма.

**✦ Байлыҡҡа битараф бул**

Был донъя минең бөтөн өмөт һәм мәнфәғәттәремдең тупланышы тип иҫәпләргә ярамай.

Ирендән кәрәккән-кәрәкмәгәнгә ҡиммәтле бүләктәр алып биреүен талап итмә.

**✦ Донъялыҡтағы байлыҡҡа битараф булыу**

- ул Аллаһы Тәғәлә рөхсәт иткән тормош кинәнестәренән баш тартыу тигәнде аңлатмай. Киреһенсә, кеше теге донъя барлығын да онотмай, Ожмахҡа инер өсөн Аллаһы Тәғәлә ниҙәр биргән, барыһын да файҙаланып, киләсәккә ҡарап йәшәргә тейеш.

**✦ Ир хәстәрен баһала, рәхмәтле бул**

Бәйғәмбәр әйтеүенсә, Тамуҡтағы кешеләрҙең күбеһен донъялыҡта изгелектең ҡәҙерен белмәй йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙар тәшкил итә.

Әгәр ирең рәхмәтле булһаң, ул бик ҡыуанасаҡ, һине тағы ла нығыраҡ яратасаҡ һәм һиңә оҡшаған нәмәләрҙе тағы ла күберәк булдырырға тырышасаҡ.

Рәхмәтле булмаһаң, ирендең күңеле һүрелеп: "Бер ваҡытта ла минең яҡшылыҡты баһаламағас, ни эшләп әле уға яҡшы булһын тип тырышырға",- тип уйлаясаҡ.

**✦ Тоғролоҡ һәм бирелгәнлек**

Ирең ауыр саҡта, мәсьәлән, һаулығына йәки эшенә бәйле проблемалар килеп тыуғанда, айырыуса тоғролоҡ күрһәт, уға терәк бул. Кәрәк булһа, аҡсаңды, хатта милкеңде лә йәлләмә.

**✦ Иреңә юл ҡуя бел**

Ирең нимә әйтә - шуны эшлә, хәрәм һаналғанды ғына эшләмә. Ислам динендә ир ғаилә башлығы, ә ҡатын-ҡыҙ уның кәңәшсеһе, ярҙамсыһы.

Кәйефе булмаһа, тынысландыр, күңеле ярһыған саҡта асыу, нәфрәт уятырҙай һүҙ һөйләмә. Әгәр кәйефһеҙ йөрөүенә үҙең ғәйепле булһаң, ғәфү үтен, әгәр ул һинең алда ғәйепле булһа, тыныс бул, үҙеңдең хаҡлы булыуыңды раҫларға тырышып бәхәсләшмә. Бөтөн мәсьәләне ирең тынысланып, үҙен ҡулға алғас ҡына бергәләп асыҡлағыҙ.

Ирендең асыулы йөрөүе ғаиләгеҙгә ҡағылмаһа, ул тынысланғансы һүҙ башлама. Сабыр ғына һыуыныуын көт. Арығандыр, йәки эшендә проблемалары күбәйгәндер, тип уны аҡларға тырыш.

Һиңә ни булды, һөйлә, тип ирендә йөҙәтмә, бигерәк тә: "Ни өсөн кәйефһеҙ йөрөүеңде һөйләргә тейешһең, һин нимәнелер минән йәшерәһең, мин ҡатының - бөтәһен дә белергә тейешмен", тигән ҡәтғи талап ҡуйма.

Ирең өйҙә юҡта үҙеңдең һәм ғаилә намыҫын һаҡла, бөтөн тыйылған яман мөнәсәбәттәрҙән ситтә йөрө. Ғаилә серен һаҡла, бигерәк тә ирең менән яҡын мөнәсәбәттәрең хаҡында һәм ирең һинән башҡаларға һөйләргә теләмәгән нәмәләр хаҡында кешеләргә һөйләүҙән тыйыл.

**Балаларыңдың тамағы туҡ, өҫ-башы һәр саҡ таҙа, бөхтә булһын. Уларҙың һаулығын, яҡшы уҡыуын һәм әҙәпле булыуҙарын ҡайғырт. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең һәм уның көрәштәштәренең тормошо хаҡында һөйләп, балаларыңды Ислам дине ҡағиҙәләренә өйрәт.**

*✓ Беҙҙә лә кемдәрҙер Көнбайыштағыса яңғыҙаҡтар өсөн танышыу клубтары һәм кисәләре ойошторорға маташа, әммә беҙҙең буйҙаҡтар унда йөрөүҙе оят күренеш итеп ҡабул итә.*

ЙӘШТӘР ҠОРО

# Әсәйҙәр ихлас илай, ҡалғандар иһә ҡылана ғына...

**Шәхес милләттән шытым ала. Был ике төшөнсә бер-береһенә тығыҙ бәйләнгән. Милләт үҙ үҫешендә ни тиклем юғары баҫҡысҡа күтәрелһә, унда көслө шәхес тәрбиәләнеүенә шунсама мөмкинлектәр була. Бөгөнгө йәштәр ҡоронда БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультетының сит телдәр кафедраһы аспиранты Ләйсән ШӘҺИВӘЛИЕВА, Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институтының өлкән уҡытыусыһы Зөлфиә ХӘМИТОВА, РФ Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге ғилми хеҙмәткәре Юлдаш ЙОСОПОВ менән әңгәмәбеҙ ошо турала - милләттең бөгөнгөһө һәм киләсәге хаҡында.**

**▶ "Туған", "туған-тыумаса", "бер туғандар" - былар тәү ҡарашҡа ябай һәм күңелебеҙгә бик яҡын һүҙҙәр. "Шалҡан" әкиәтен иҫләйһегеҙме? Ваҡиғаларҙа шалҡан, бабай, әбей, ейәнсәр, эт, бесәй, сыҫҡан ҡатнаша, әммә бында атай-әсәй юҡ. Балаларҙың күҙ алдында тулы булмаған ғаилә кәүҙәләндерелә. Һөҙөмтәлә, уларҙың аң аҫтында "тулы булмаған ғаилә - ғәҙәти күренеш, хәҙер бөтәһе лә шулай йәшәй" тигән мәғлүмәт һеңдерелә. Һуңында инде туғанлыҡ, ғаилә гармонияһы боҙолоуы барлыҡҡа килә. Тулы булмаған ғаиләгә, олатай-өләсәйҙәрҙең айырым йәшәүенә ҡарашығыҙ нисек?**

**ЗӨЛФИӘ:** Беҙ уҡыған осорҙа был әкиәттәрҙе икенсе юҫыкта аңлата торғайнылар. Дарвин-Маркстың эволюция теорияһына ярашлы, кеше тәүҙә маймыл булған, һуңынан хеҙмәт уны кешегә әүерелдергән, йәнәһе. "Шалҡан" әкиәтен генә алайыҡ: беҙ уны, әбей менән бабайҙың ярҙамсылары хеҙмәт, тырышлыҡ ярҙамында шалҡанды тартып сығарҙы, тип аңланыҡ. Йәғни хеҙмәт ярҙамында барыһына ла ирешеп була, тип тәрбиәләндек. Хәҙер иһә, психолог булараҡ, шуны әйтә алам: ысынлап та бында балалар аңына тулы булмаған ғаилә моделе һеңдерелә.

Статистикаға күҙ һалайыҡ: балаларҙың 30 проценты тулы булмаған ғаиләлә тыуа. Рәсәйҙә теркәлгән йәш ғаиләләрҙең яртыһы тиерлек тәүге йылда уҡ тарҡала. ЗАГС хеҙмәткәрҙәре билдәләүенсә, өйләнеү модаға ингән, шул уҡ мәлдә айырылышыу ҙа модала.

**ЮЛДАШ:** Мин быҒаса "Шалҡан" әкиәтендәге бындай логик хатаны аңғармай торғайным. Бөгөнгө фәнни, психологик юҫыктан ҡарағанда, бында балаларҙы образдар аша программалаштырыу асыҡтан-асыҡ күренә. Ғөмүмән, бөгөн балаларҙы, йәштәрҙе программалаштырыуҙа телевидение һәм кино ла ҙур роль уйнай. Һуңғы йылдарҙа Рәсәй киноиндустрияһында "Бригада", "Жмурки" кеүек яртылаш мафияны, яртылаш наркоманлыҡты данлаған фильмдар теҙмәһе булдырылды. Хатта Башҡортостанда төшөрөлгән һуңғы киноларҙа ла наркоманлыҡ, мафия күренештәре һүрәтләнде. Бындай киноларҙы күберәк йәштәр яратып ҡарай. Һөҙөмтәлә "Том һәм Сойер" кеүек йәнһүрәттәрҙәге, "Терминатор" кеүек фильмдарҙағы, "Doom" кеүек компьютер уйындарындағы образдарҙы балалар, йәштәр үҙҙәре лә аңламайынса йәмғиәттә, урамда тергеҙә. Йәғни, ялған идеалдар булдырыла һәм аҫтыртын ғына телевидение, реклама, китап, компьютер, Интернет ярҙамында балалар аңына һеңдерелә.

Асылда, халыҡ фольклоры быуаттар төпкөлөнән саф көйөнсә һаҡланып килгән тәрән мәғәнәле рухи байлыҡ. Ләкин төрлө сәйәси ҡоролош кисергән йәмғиәтебеҙҙә ҡайһы бер әкиәттәрҙең, эпостарҙың махсус рәүештә әхлаҡһеҙ "төҙәтелеп" ебәрелгән осраҡтарын да беләбеҙ. Мәҫәлән, хәҙер рус әкиәттәрендә баһадирҙар, геройҙар бөтәһе лә эскесе итеп һүрәтләнә. Йәнәһе, "мин унда булдым, һыра, бал эстем, мыйыҡҡа эләкте, ауыҙға эләкмәне". Һыра һүҙе русса "пиво" булараҡ яңғырай. Ысынында иһә, рус әкиәттәрендә "пИво" тураһында түгел, ә "пЕво" хаҡында һүҙ бара. "Пево" иһә ете шишмә һыуын ҡатнаштырып яһалған таҙа һыу, тигәнде аңлата. Тимәк, әхлаҡһеҙ әҙәмдәр "пево"нан "пиво" яһаған. Был иһә рекламаларҙа рус баһадирҙарының һыра эсеүсе геройҙар итеп һүрәтләнеүенә килтерҙе. Бындай әкиәттәрҙе уҡыған, рекламаларҙы-киноларҙы ҡараған балалар һыра эсергә әүәҫләнде.


Юлдаш


Зөлфиә


Ләйсән

**ЛӘЙСӘН:** Һүҙ юҡ, сит ил һәм рус әкиәттәрендә йыртыҡтар осрай. Ләкин былар барыһы ла башҡорт балаларын башҡорт фольклоры, башҡорт халыҡ педагогикаһы, Ислам әхлаҒе нигеҙендә тәрбиәләргә кәрәклегенә ишара ла инде. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, балаларыбыҙ халыҡ әкиәттәрен уҡымай, ә фэнтези стилендә яҙылған "Гарри Поттер" кеүек заман авторҙары китаптарын ярышып уҡый. Психологтар билдәләүенсә, балаларҙы тап ошондай әҫәрҙәрҙән йыраҡ тоторға кәрәк.

Бала бигерәк тә олатай-өләсәй булған ғаиләлә камил шәхес булып тәрбиәләнә. Унда ул төрлө йәштәге һәм енестәге кешеләрҙең көндәлек тормошта үҙ-ара аралашыуын, тәртибен һәм ғүмер ағышының төрлө һынауҙарын нисек еңеүен күреп үҫә. Бер нисә быуын кешеләре йәшәгән тулы ғаиләне мәғариф системаһы алыштыра алмай. Шуға ошондай йәшәү имиджын һаҡларға, таратырға кәрәк.

**▶ Тәбиғәт бушлыҡты яратмай. Күңелдәге ата-әсә буш ҡалдырған урынды башҡалар тултыра һәм ата-әсә шулай "аңғармаҫтан" ғәзизенән баш ҡаға. Бөгөнгө йәмғиәттең йөҙөн ҡыҙартҡан анархистар, эскеселәр, енәйәтселәр, маргиналдар, маңҡорттар... улар ғаиләлә тейешле тәрбиә алмаған балалар...**

**ЛӘЙСӘН:** Әгәр ҙә ололар бер тапҡыр яңылыша икән, йәштәр мең тапҡыр яңылышасаҡ. Әгәр ҙә атай хаталанһа, уның улы ла хаталанасаҡ, әсәй артынан - ҡыҙы, ҡәйнә артынан - килене... Милләт әхлаҡһеҙлек һаҙлығына батты икән, йәштәр ҙә упҡынға тәгәрәй.

**ЗӨЛФИӘ:** Йәш кеше - ҙур көстөң һәм оло аҡылдың үҫентеһе. Әгәр ҙә уны дөрөҫ тәрбиәләп, дөрөҫ йүнәлешкә борһаң, Геракл кеүек, ул үҙе үк һынауҙар өсөн һынау буласаҡ, үҙ көсө ярҙамында ҡараңғылыҡты яктыртасаҡ һәм донъяла тыныслыҡ урынлаштырасаҡ.

Йәмғиәт, әйтәйек, гәлсәр вазаға оҡшаш, йәштәрҙе вазаға ҡойолған һыу тип күҙаллайыҡ. Был һыу уға гәлсәр ваза биргән төҫтө һәм форманы ала. Шуға күрә, ҡайһы бер оло быуын вәкилдәре йәштәрҙе наҙанлыҡта ғәйепләр алдынан үҙҙәренә ҡараһа ине. Йәғни, әгәр ҙә бөгөн йәштәрҙең күңелендә бушлыҡ хасил булды, тип һүҙ йөрөтәбеҙ икән, тимәк, вазабыҙ сатнаған, яңылыш форма алған.

**▶ Буйҙаҡлыҡ, яңғыҙлыҡ башҡортто ла борсоған мәсьәлә. Был хәҙер беҙҙең өсөн оло бер афәткә әйләнеп бара. Тыуыр балалар тыумай ҡала, буйҙаҡтар үҙ-үҙҙәренә ҡул һала. Был хәлгә һеҙ ниндәй ҡараршта?**

**ЛӘЙСӘН:** Күп ғалимдар, табибтар буйҙаҡлыҡтың заман сире булыуын билдәләй. Әммә яңғыҙлыҡ Көнбайышта тәғәйен реклама брендына, ғәҙәти фәлсәфәгә, психоаналитиктар бизнесы өсөн отошҡа әйләнгән. Унда буйҙаҡтар үҙҙәрен "шат, бәхетле" итеп күрһәтергә тырыша. Беҙҙең буйҙаҡтарҙың хәле икенсерәк. Улар йәмғиәттән ситтә, үҙ-үҙҙәренә бикләнгән, күбеһе эскелек һаҙлығына батҡан. Беҙҙә лә кемдәрҙер Көнбайыштағыса яңғыҙаҡтар өсөн танышыу клубтары һәм кисәләре ойошторорға маташа, әммә беҙҙең буйҙаҡтар унда йөрөүҙе оят күренеш итеп ҡабул итә. Беҙҙекеләр Интернет аша ла, Көнбайыштағы һымаҡ, тиҙ генә танышып, ҡауышып бармай. Психологтарға ла мөрәжәғәт итмәйҙәр. Былар барыһы ла буйҙаҡлыҡты бәләгә әүерелдерә лә инде беҙҙә.

**ЗӨЛФИӘ:** Статистикаға ярашлы, Рәсәйҙең 50 процент ҡатын-ҡыҙы ирһеҙ, яңғыҙ йәшәй. Һәр мең ҡатын-ҡыҙҙың 175-е бер ҡасан да кейәүгә сыҡмаған, 180-е - тол ҡатындар һәм 110-ы - айырылышҡандар. Бөгөн Рәсәйҙең 55 процент халҡы рәсми ғаилә ҡороп йәшәй. Гражданлыҡ ғаиләһендә 4 проценты тора. Айырылышҡандар иҫәбе 8 процентҡа барып етә, ә буйҙаҡ ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар һаны яҡынса 16 процент тәшкил итә. Шулай итеп, Рәсәйҙә һәр дүртенсе кеше яңғыҙаҡ. Шул уҡ мәлдә халыҡтың 76 проценты "мөхәббәт" төшөнсәһен үҙҙәре өсөн мөһим нәмә тип билдәләй.

**ЮЛДАШ:** Яңғыҙлыҡтың кеше һаулығы өсөн зыянлы икәнен табибтар күптән иҫбат итте. Был бигерәк тә ғүмер оҙайлығында сағылыш таба. Уртаса 30 йәште уҙғас, яңғыҙлыҡ сәләмәтлекте нык ҡына ҡаҡшата башлай. Асыҡланыуынса, бер ҡасан да өйләнмәгән йә айырылышҡан ирҙәр араһында үлем осраҡтары 10 процентҡа, ҡатын-ҡыҙҙар араһында 4,8 процентҡа йышыраҡ.

**▶ Бай ғына ир "Мерседес" тәҙрәһенән башын сығарып, юлда китеп барған әбейгә: "Өләсәй, ултыр, бараһы ереңә алып барып еткерәм",- ти икән. "Юҡ, улым, мин ашығам", - тип яуаплай йәйәүле әбей. Бер километр самаһы юл үткәс... әбей һәләкәткә осрап ҡыйралып ятҡан "Мерседес"ты уҙып китә. Бында Көнбайыш шауҡымы - ваҡытлыса байлыҡ менән мәңгелек байлыҡҡа ишара яһала. Бөгөн беҙҙең йәштәребеҙҙе лә "әйҙә, ултыр "Мерседес"ҡа, матди байлыҡ артынан ҡыуайыҡ" тип өндәйҙәр... Башҡорт йәштәре бындай ымһындырыуҙарға нисек яуап ҡайтарырға тейеш?**

**ЮЛДАШ:** Бөгөнгө әхлаҡһеҙлектән, битарафлыҡтан йәштәребеҙҙе нисек ҡотҡарырға, тип ҡуяйыҡ һорауҙы. Бының өсөн... ошоларҙы башҡарыу мөһим: беҙҙе эҙәрлекләгән күңел, аҡыл тынғыһыҙлығынан бер аҙға арынайыҡ һәм тыныс ҡына йәшәйешебеҙ хаҡында ултырып уйланайыҡ.

Һис шикһеҙ, беҙ үҙебеҙҙең кемдеңдер шахмат уйынында пешка ғына, глобаль сценарийҙа винтик ҡына икәнлегебеҙҙе аңлаясаҡбыҙ. Ә һуңынан иһә үҙ-үҙебеҙгә һүҙ бирергә ҡала: "Мин үҙ ғүмеремә үҙем хужа буласаҡмын, минең менән башҡаларға идара итергә хоҡуҡ бирмәйәсәкмен. Кеше ҡайғыһында сереп байыған бурҙарҙы үҙ иҫәбемә байытмаясаҡмын, мин башҡаса һыра, араҡы һәм наркотиктар өсөн аҡсамды сарыф итмәйәсәкмен. Минең әхлаҡле илдә әхлаҡле милләт вәкиле булып йәшәгем килә. Балаларым менән ейәндәремдең имен-һау булыуын, аҡыллы, бәхетле булыуын күргем килә".

Яңыраҡ "Евразийство" хәрәкәте лидеры Дугиндың концепцияһы тирәләй ғауға булып алғайны. Унда Дугин Башҡортостан менән Татарстан тураһында ла һүҙ алып бара. Ил, донъя идарасыларына кәңәштәрен бирә. Ул башҡорттар менән татарҙарҙы көслө, рухи нигеҙле, үҙ ерҙәрендә оло матди байлыҡҡа әйә халыҡтар, тип билдәләй. Был ике көслө, туғандаш халыҡтар диалог ҡорһа, берләшһә, Рәсәйҙә, донъяла көслө сәйәси-иҡтисади көс булдырасаҡ, тип күҙаллай. Шуға күрә мөмкин тиклем татар менән башҡорт араһында уйҙырма ыҙғышты, талашты дауам иттерергә, бының өсөн аҡса йәлләмәҫкә тәҡдим итә... Күрәһегеҙ, беҙҙең һәр аҙымыбыҙ, һәр көнөбөҙ менән идара итәләр. Аҡса менән дә ымһындыралар. Шуларҙы аңлап ҡына беҙ бына шундай бысраҡ сәйәсәттәргә, аҡсаға ҡаршы тора аласаҡбыҙ.

**ЛӘЙСӘН:** Мин йыш ҡына уйланам был турала: үҙ гендарында тәрән әхлаҡи сафлыҡ һаҡлаған милләт нисек итеп тарихтың бер боролошонда сит көстәр тәьҫиренә бирелә ала? Күрәһең, Советтар осоронда беҙҙең ҡиммәттәргә ниндәйҙер зыянлы йоғонто яһалғандыр. Төп зыян, әлбиттә, милләттең рухи үҙәгенә - ғаиләгә яһалды. Был башҡорттарҙы милләт булараҡ емереү өсөн иң еңел һәм ҡулайлы ысул. Шуға ла милләтте яңы быуатта уңышлы итеп күргебеҙ килһә, ғаилә ҡиммәттәрен тергеҙеү мотлаҡ.

"Улым, сабый сағыңда, илауҙан башҡа бер ни ҙә белмәгәндә, мин һине күберәк аңлай инем. Хәҙер, һин ҙурайғас, мин һине бөтөнләй аңламайым", - тип көрһөнә йөрәктәре һыҙлап бөгөн әсәйҙәребеҙ. Төркмәндәрҙә шундай мәҡәл бар: "Әсәйҙәр генә ихлас илай, ә ҡалғандар иһә ҡылана ғына". Ғаилә ҡиммәттәрен тергеҙеү әсәйҙәрҙе, атайҙарҙы хөрмәт итеүҙән башлана. Һәр бала уларҙы бәхетле итергә, оҙағыраҡ йәшәтергә тырышырға тейеш.

**ЗӨЛФИӘ:** Ысынлап та, бөгөн бар донъя Көнбайыштан махсус килтерелгән сценарий буйынса йәшәй. Йәшәйешебеҙ ниндәйҙер бер фильмға оҡшаған, унда төп геройҙар - президенттар, сәйәси һәм ижтимағи лидерҙар, ябай халыҡ бар. Уларҙан тыш, сценарий авторҙары менән режиссерҙар бар, тап улар кадр артында тороп, фильмдағы ваҡиғаларҙың ниндәй йүнәлештә барыуын хәл итә. Етмәһә, бағыусылар ҙа бар, барыһы ла улар аҡсаһына башҡарыла. Уларға ҡаршы тороу өсөн үҙебеҙҙең сценарийҙы булдырырға кәрәк. Бының өсөн беҙҙең арала ла көслө лидерҙар ҡалҡып сығыуы, ҙур эштәр башҡарыуы мотлаҡ.

**Марат АБДУЛЛИН**
**әңгәмә ҡорҙо.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Йәштәребеҙ халҡыбыҙҙың киләсәге хаҡында уйлана, фекер туплай. Аллаға шөкөр, уйлана белгән, үрнәк булырлыҡ йәштәребеҙ етерлек. Улар әҙер ҡалып буйынса йәшәгән балалар түгел, улар заман ваҡиғаларынан үҙҙәре һығымта яһаған, тормошта үҙ юлдарын билдәләгән быуын. Тап уларҙың ошо нурлы ынтылышы милләтебеҙҙең әхлаҡле яҙын булдырасаҡ та инде.**

✓*Музыка ерҙәге бөтөн тереклеккә көслө йоғонто яһаған, үҫеп килеүсе йәш быуындың психикаһына мейене сүкегән барабандың ғына дыңҡылдауынан торған музыканың ниндәй йоғонто яһауы аңлашыла.*



Аһ, ҠЫҘ-ҠАТЫН!



# ХОҘАЙ ИНСЕЛӘГӘН БҮЛӘКТЕР

## көй сығарыу...



**Нәфис музыка, моңло йыр-көйҙәр ижад итеү һәләте, моғайын, Хоҙайҙың кешеләргә инсеЛәп кенә биргән бүләгелер. Республикала танылған ижадсылар - билдәле композиторҙар Айһылыу СӘЛМӘНОВА менән Нурия АБДУЛЛИНАға ла ошондай бүләк яҙған. Улар менән әңгәмәбеҙ - моң тураһында.**

> ***Талғын ғына яңғыраған матур музыка ҡуйһаң, һауыттағы һыуҙың сафланып, кристалдай емелдәп китеүен, ә шау-шыулы ауыр музыка тәьҫиренән уның үтә күренмәлелеге шунда уҡ үҙгәреүен ғалимдар күптән иҫбат итте. Ауыр музыканан гөлдәр ҙә һулый. Бала бит музыка аша ла тәрбиә ала.***

▶ **Йыр, музыка ижад итеү ир-егеттәр шөғөлә һымағыраҡ ҡабул ителә, сөнки донъя музыкаһы хазиналарының төп өлөшөн башлыса көслө зат ижад иткән...**

**Айһылыу СӘЛМӘНОВА**: Элекке композиторҙарҙың башлыса ир-ат затынан булыуы әлеге ла баяғы йәмғиәттең ҡатын-ҡыҙға мөнәсәбәтенән киләләр инде ул. Гүзәл затка фәҡәт ир ҡатыны, бала тәрбиәләүсе тип ҡарау элек тә булған, әле лә бар. Ләкин был әле ҡатын-ҡыҙ йыр сығармаған, шиғыр яҙмаған, тигәндә аңлатмай. Мин һәр саҡ атайым, композитор Рафиҡ Сәлмәновтың һәм үҙемдең музыка ижад итеү һәләте ҡайҙан килә икән, тип уйлай торғайным. Бынан ун йыл самаһы элек Әбйәлил районының Рауил ауылында осраҡлы ғына бер инәй менән танышып һөйләшеп киткәйнек. Ул: "Атайыңдың композиторлыҡ һәләтен кемдән алыуын, моғайын, белмәйһеңдер. Ҡартәсәйең йырсы, шағирә булды. Үҙе сығарған шиғырҙарға үҙе көй һалып йырлай торғайны. Сәсән теле, үтә лә моңло итеп йырлауы менән тирә-йүндә данлы булды, уны белмәгән, хөрмәт итмәгән кеше юҡ ине",- тине. Атайым әсәһенән йәш ярымлыҡ ҡына сағында тороп ҡала, шуға ла әсәһе тураһында бер ни ҙә белмәй ине.

**Нурия АБДУЛЛИНА:** Халкыбыҙҙың әҙәп ҡағиҙәләре лә гүзәл затка үҙ һәләтен ғәм халыҡҡа күрһәтергә форсат бирмәгән. Тәбиғәте менән музыкаль башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ҡумыҙҙы ла йәшеренеп кенә сирткән.

Бөгөн заман икенсе, әлбиттә. Йырсы булырға ла, композитор булырға ла ҡулыбыҙҙан килә. Мине бына композитор тип йөрөтәләр. Әммә мин үҙемде композитор тип һанамайым, хатта был исемгә дәғүәләшергә лә баҙнат итмәйем. Ләкин йырҙар яҙам, уларҙы башҡарыусыларым, тыңлаусыларым бар. Йырҙар ижад итеү - ул минең күңел талабым. Мәҫәлән, "Ултыр әле әсәй, яндарыма" тигән йырым таң атканда көйө һәм һүҙҙәре менән күңелемдә ярадлы. Тиҙ генә урынымдан торҙом да, башҡаларҙы уятмаҫ өсөн кухняға инеп бикләндем, йырҙы магнитофонға яҙҙырҙым. Ижадҡа илһам - ул ниндәйҙер мөғжизәүи ынтылыш. Был хисте бер нисек тә аңлатып булмай.

▶ **Яҙмышығыҙ музыка, йыр сәнғәте менән бәйле булырын бала саҡтан тойҙоғоҙмо?**

**Айһылыу СӘЛМӘНОВА:** Мине музыка менән шиғриәт икеһе берҙәй ылыҡтырҙы. Шағирә буласаҡмын, тип уйлай торғайным. Атайым: "Башҡорт шағирәһе булыу өсөн башҡорт телендә яҙырға кәрәк. Һин бит русса яҙаһың, шулай булғас, ниндәй башҡорт шағирәһе булаһың ти?" - ти торғайны. Музыка юлын һайлап, Ҡорманғазы исемендәге Алма-Ата консерваторияһында уҡығанда рус телендә ижад итеүсе ҡаҙаҡ шағиры Олжас Сөләймәнов менән осраштым. Уның менән һөйләшеү минең өсөн ҙур асыш булды. Ул русса яҙһа ла, ҡаҙаҡса фекерләй һәм ул фәҡәт ҡаҙаҡ халкының шағиры. Бәхтиһәң, фекереңде һүрәтләү өсөн ниндәй телдә ижад итеүең мөһим түгел икән. Ә симфоник музыканың мөмкинлектәре киң, ул миллилектән айырыла, ул барыһы өсөн дә аңлайышлы. Уның башҡорт, итальян йә һинд музыкаһы булыуын ниндәйҙер интонациялары аша ғына тойомларға мөмкин. Шулай ҙа мин атайымдың юлынан барыуыма үкенмәйем. Музыка ижад итеүем шиғырҙар яҙыуым менән йәнәш бара...

**Нурия АБДУЛЛИНА:** Бәләкәйҙән йырға, музыкаға тартылыуым көслө булды һәм 1-се Республика башҡорт интернат-мәктәбенең 9-сы синыфын тамамлағас, музыка-педагогия училищеһына уҡырға индем. Атайым быны белгәс, документтарымды кире алырға ҡушты, сөнки ул мине мотлаҡ БДУ-ла уҡытырға, уҡытыусы итеп күрергә теләй торғайны. Ә мин йыр-моң донъяһынан башка йәшәүҙе күҙ алдыма ла килтерә алманым.

▶ **Һуңғы йылдарҙа йырҙың йөкмәткеһе лә, көйө лә заулыҡһыҙ йырҙар күбәйҙе. Ундай йырҙарҙың бермә-бер артыуының сәбәбе ниҙә, тип уйлайһығыҙ?**

**Нурия АБДУЛЛИНА:** Минеңсә, зауыҡһыҙ йырҙар менән мауығыу һәр быуындың йәшлегенә хас ваҡытлы күренеш. Төрлө жанрҙа ижад итеүсе йәштәр күп. Улар араһында матур ғына йырҙар ижад итеүселәр ҙә юҡ түгел. Йәштәргә бит етеҙ ритмлы музыкаға бейеп хәрәкәтләнеү хас. Ләкин мәле еткәс, улар барыбер ысын сәнғәткә тартыласаҡ.

**Айһылыу СӘЛМӘНОВА:** Музыканың шәхес тәрбиәләүҙәге тәьҫир көсө баһалап бөткөһеҙ. Талғын ғына яңғыраған матур музыка ҡуйһаң, һауыттағы һыуҙың сафланып, кристалдай емелдәп китеүен, ә шау-шыулы ауыр музыка тәьҫиренән уның үтә күренмәлелеге шунда уҡ үҙгәреүен ғалимдар күптән иҫбат итте. Ауыр музыканан гөлдәр ҙә һулый. Бала бит музыка аша ла тәрбиә ала. Музыка ерҙәге бөтөн тереклеккә көслө йоғонто яһаған, үҫеп килеүсе йәш быуындың психикаһына мейене сүкегән барабандың ғына дыңҡылдауынан торған музыканың ниндәй йоғонто яһауы тураһында әйтеп тә тораһы түгел. Хәҙер күп балалар, ҡыҙғаныска ҡаршы, шундай түбән кимәлдәге "музыка"ны тыңлап үҫә. Шунан аҙаҡ балалар наркоманлыҡҡа тартыла, әсә, тарта, тәртипһеҙ, тигән булабыҙ. Былар ҡайҙан килә тиһегеҙ? Әлбиттә, мәғәнәһеҙ, яман музыканы тыңлауҙан да килә. Шуның өсөн балаларҙа бәләкәйҙән күңелде сафландырыр, яҡты хистәр уятыр матур йыр-көйҙәргә һөйөү тәрбиәләү фарыз. Мин, мәҫәлән, бәләкәйҙән ҡурай моңон тыңларға яраттым, ғөмүмән, был боронғо музыка ҡоралынан ағылған тәрән моңдо бер ваҡытта ла тыныс күңел менән тыңлай алмайым...

▶ **Композитор ижад иткән үлемһеҙ классик әҫәр менән халыҡ йыры араһында ниндәй айырма бар?**

**Айһылыу СӘЛМӘНОВА:** Халыҡ йыры - ул үҙе үк классика. Ул кемдеңдер берәй ваҡиғаға көслө әҫәрләнеүе, йәки тәбиғәт хозурлығына һоҡланыуы, йәки башка тулҡынландырғыс хистәр кисереүе һөҙөмтәһендә тыуған моң. Уны икенсе берәү тағы ла матурыраҡ итеп үҙенсә үҙгәртә, өсөнсөһө көйгә йәнә ниндәйҙер биҙәктәр өҫтәп йырлай. Шулай итеп, йырҙың һүҙҙәре лә, көйө лә торған һайын матурыраҡ була бара һәм ул "йышылып", камил бер моңға әйерелеп, киң даирәлә таралып, халыҡ йырына әйерелә. Бер ҡыҙыклы хәл иҫкә төштө. Мин кешеләр менән танышканда, Рафиҡ Сәлмәновтың ҡыҙымын, тиһәм, ғәҙәттә, атайыңдың ниндәй йырҙары бар әле, тип һорай һалалар. "Сирень сәскәлере"н беләһегеҙме?" тим. "Әлбиттә, беләбеҙ, ул бит халыҡ йыры", тиҙәр. Был үҙе үк йырҙың халыҡ күңеленә үрелеп популярлашыуы, халыктың уны күптән үҙенеке тип иҫәпләүе тураһында һөйләй.

▶ **Халыҡ йырҙарына клип төшөрөүҙәренә нисек ҡарайһығыҙ? Һәр хәлдә, беҙҙә төшөрөлгән клиптар араһында уңышһыҙҙары күберәк һымаҡ...**

**Нурия АБДУЛЛИНА:** Мин, мәҫәлән, йырға кино төшөрөүҙәрен аңламайым. Йырҙың серлелеге лә шунда: моң тәрәнлеген уны башҡарыусының күҙҙәренә генә ҡарап тыңлау мөһим. Юғиһә, йыр яңғырағанда уны тыңларғамы, әллә иғтибарыңды экранда ялп-йолп килгән кадрҙарға йүнәлтергәме, белеп булмай. Бәлки мин яңылышамдыр. Һәр хәлдә, был күренеште хупламайым, сәнки йырға киноны төшөрә белеп төшөрөү мөһим. Ул үҙе бер ҙур сәнғәт.

**Айһылыу СӘЛМӘНОВА:** Клиптар төшөрөү ҙә кәрәк, тик уларҙа йырҙың эстәлеге бар дәрәҫләгәндә йөкмәткеле итеп сағылдырылырға тейеш. Ләкин, ҡыҙғаныска ҡаршы, беҙҙең телевидениела әлегә Луиза Ильясова-Коряковцеванан башка йырҙарға юғары кимәлдә клип төшөрөүсе юҡ. Луиза Мозаффар ҡыҙы, һис шикһеҙ, талантлы кеше, ул йырҙың асылын, унда һүҙҙең ни тураһында барыуын күңеле менән тоя.

▶ **Йырҙың, музыканың сәләмәтлек өсөн шифалы булыуы билдәле. Италияла, мәҫәлән, мигрень менән сирләүселәргә хәҙер "Аве Мария"ны тыңлатып һауыҡтыралар...**

**Айһылыу СӘЛМӘНОВА:** Һис шикһеҙ, музыканың төрлө сирҙән дауалар тылсымлы шифаһы барлығы донъя кимәлендә билдәле. Мәҫәлән, минең "Аркайым" симфониямдың "Шишмә янында" тигән симфоник медитацияма дирижерлыҡ итергә тейешле Таһир Камалов бик һыҡ ауырып китте. Дирижерлыҡ итә алмаҫмын, ахыры, хәлем насар, ти. Ләкин мин репетиция ваҡытында уҡ музыканың уны мотлаҡ аяҡҡа баҫтырасағын күңелем менән тойҙом, һәм ысынлап та шулай булды. Концерттан һуң Таһир Камалов музыка яңғырап китеү менән күңеле илһамланып, һауыға башлауы тураһында хайран ҡалып һөйләне...

**Нурия АБДУЛЛИНА:** Ҡатын-ҡыҙҙың күңеленән сыҡҡан музыканың шифаһы икеләтә көслөләр. Бынан ике-өс йыл элек миңә 21-се дауахананан: "Нурия, һин "Ризыҡтарым әҙәлмәгән әле" тигән йырыңдың яҙмаһын килтерә алмаҫыңмы икән, уны реанимацияла яткан ауырыуҙарға тыңлатыр инек", тип шылтыраттылар. Күрәһең, табиптар ул йырҙа йәшәү менән үлем араһында яткан ауырыуҙарҙа йәшәүгә өмөт саткылары тоҡандырыр, күңелде тынысландырыр ниндәйҙер көс барлығын тойған. Йыр-моңдоң ҡөҙрәте киң, уның кеше ғүмерендә уйнаған роленең илаһилығын бер ниндәй ҡиммәттәр менән дә сағыштырып булмай...

**Миңниса СӘФӘРҒӘЛИНА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*✓ Ысын ҡурайсы оҙон, марш көйҙәрен күкрәккә һалып уйнай. Ундайҙар беҙҙә күп түгел. Әммә ҡурайсы алдына шундай талап ҡуйылһа, хәл үҙгәрер, тип уйлайым.*

ИЖАДХАНА

# Ҡурайсы, бейеүсе, өзләүсе - бер кешелә ошо тиклем һәләт!

**Ҡимммәттәр үҙгәргән был заманда матурлыҡҡа, камиллыҡҡа урын юҡ һымаҡ тойолоп китә. Әммә айырым кешеләрҙәге матурлыҡты тоя, ишетә белеүсе Ижадсы рухы бар донъяны ҡотһоҙлоҡтан ҡотҡарыу һәләтенә эйә. Ундайҙар ҡайҙалыр күктә, йыһанда түгел, беҙҙең янда, беҙҙең арала йөрөй һәм тыныс ҡына, ашыҡмай, изге ғәмәлдәр атҡара. Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Учалы филармонияһы режиссеры һәм художество етәксеһе, ҡурайсы, өзләүсе, бейеүсе Рәис Йәүҙәт улы НИЗАМЕТДИНОВ тап ана шундайҙарҙан. Үҙен тыңлайыҡ булмаһа.**

## Сәнғәттәге үҙ һуҡмағың

Сәнғәттә үҙ һуҡмағыңды булдырам, тип, әллә ниҙәр уйлап сығарырға кәрәкмәй. Минең яратҡан ҡурайсыларым - улар Сәйфулла, Ишмулла, Ишҡәле Дилмөхәмәтовтар, Мөхәммәт Түләбаев. Уларҙың барыһының да архивта яҙмалары һаҡланған. Һәм ошо талант эйәләренең оҙон ҡурайҙы күкрәккә һалып, марш, оҙон көйҙәрҙе моңло, аһәңле итеп уйнауы - беҙгә өлгө лә инде. Уларҙан уҙып, әллә ни атҡараһы түгел, ә ошо мәшһүр ҡурайсылар кеүек уйнарға өйрәнергә генә кәрәк. Уларҙа борондан килгән уйын өлгөһө һәм уны бер нисек тә онотоорға ярамай.

Ғөмүмән, сәнғәт борондан килгән традицияларға таянып эш итһә, күпкә отошлораҡ булыр ине. Бейеү сәнғәтен алып ҡарайыҡ. Башҡорт бейеү сәнғәтен үҫтереүсе Фәйзи Ғәскәров халыҡ араһына сығып, башҡорт бейеүенең бөтә нескәлектәрен өйрәнеп, ошо өлгөләрҙе беҙгә мираҫ итеп ҡалдырған. Ошо халыҡ бейеүе стиленән башҡа ниндәйҙер стиль уйлап табыу дөрөҫ тә түгел һымаҡ. Стәрлетамаҡ бейеү театрының үҙ стиле бар, тиҙәр. Ләкин мин уны халыҡ бейеүе стиле, тип әйтмәҫ инем. Ғәскәров традицияларынан ситкә тайпылмайынса, шул хәрәкәттәр һыҙатын һаҡлап ҡалырға тырышыу күпкә отошлораҡ булыр ине.

## Өзләй белеү - үҙе юғары сәнғәт

Өзләү сәнғәте башҡортта борон-борондан булған. Ҡурай тауышына ҡушылып өзләүсе талант эйәләре хаҡында хәтирәләр һаҡлана: оҫталар оҙон көйҙәрҙе лә, ҡыҫҡа көйҙәрҙе лә өзләгән. Бөгөнгө көндә иһә өзләү сәнғәте онотолған ерҙән тергеҙелеп килә.

Өзләүҙә төп тауыш эргәһенә уралып икенсе тауыш килеп ҡушыла. Бына ошо үҙенсәлек башҡорт өзләүенә хас башҡарылыш, тиер инем мин. Башҡа халыҡтар өзләүе йыр менән бергә башҡарыла. Беҙҙә лә ундай өзләү булғандыр, сөнки халыҡ йыраусыларын, мәҫәлән, Рамазан Йәнбәковтың яҙмаларын тыңлап ҡараһаң, ҡайһы бер урындарҙа йырсы көй аҙағында өзләү тауышы ла сығарып ҡуя. Ишмулла Дилмөхәмәтовтың яҙмаларын тыңлаһаң, ул да ҡурайында уйнап, йырлап, өзләп ебәрә. Улар боронғо өзләү традицияларын ишетеп, күреп үҫкән быуын бит инде.

Өзләү сәнғәтен үҫтерер өсөн уны хакас, тыва йәки башҡорт өзләүе, тип бүлгеләп ҡарарға кәрәкмәйҙер. Уның урынына бербеберебеҙҙән өйрәнеп, архивтағы яҙмаларҙы тыңлап, өзләүгә ятып торған көйҙәребеҙҙе табып, был сәнғәтте популярлаштырыу мөһим. Хакас, тываларҙы үҙебеҙгә саҡырып алып, асыҡ дәрестәр, мастер-кластар үткәреү ҙә зыян булмаҫ ине. Сөнки өзләүҙең төп принцибы, йәғни төптән өзләп, тамаҡтан ике тауыш килтереп сығарыу манераһы бер үк. Беҙҙең өзләүгә килешеп торған көйҙәребеҙ бихисап.



## Ҡурайсы һәм башҡарыусы

Ысын ҡурайсы оҙон, марш көйҙәрен күкрәккә һалып уйнай. Ундайҙар беҙҙә күп түгел. Әммә ҡурайсы алдына шундай талап ҡуйылһа, хәл үҙгәрер, тип уйлайым. Былтыр Йомабай Иҫәнбаев исемендәге һәм Октябрьский ҡалаһында үткәрелгән конкурстарҙа ҡурайсыларҙан илленән ашыу көй уйнай белеүҙе талап иттеләр. Минеңсә, был бик дөрөҫ булды. Юғиһә, күп кенә конкурс шарттары буйынса, ике турға икешәр генә көй әҙерләп алып барыу ҡаралған. Был дүрт көйҙө ныҡ итеп өйрәнеп килеү бер ни тормай, ә ҡалған көйҙәрҙе, бөтәһе тимәһәм дә, йәштәрҙең байтаҡ өлөшө белмәй, өйрәнмәй. Илле көйҙө өйрәнеү үҙе үк ҙур мәктәп бит инде.

## Ҡурай үҙгәрешһеҙ ҡалырға тейешме?

Төп ҡурай - биш тишекле ҡурай - үҙгәрешһеҙ ҡалырға тейеш. Әммә шул уҡ ваҡытта Ишморат Илбәков уйнап йөрөгән ҡурайҙа, ул башҡорт флейтаһы исеме аҫтында йөрөй, йәшәргә хаҡлы. Модернизациялауҙан ҡурай бер ни юғалтмаясаҡ: тембр, тауыш әллә ни үҙгәрмәй бит. Ундай ҡурайҙың да йәшәргә хоҡуғы бар, тип уйлайым. Беҙгә ниндәйҙер ҡалыплашҡан фекерҙәрҙән арынырға һәм алға атларға ҡурҡмаҫҡа кәрәк.

## Халыҡ йырҙарын - заманса стилдә

Әгәр ҡолаҡҡа ятышлы ғына килеп сыға икән, ниңә халыҡ йырҙарын заманса эшкәртмәҫкә? Сөнки оҙон көйҙө, тәрән моңдо кеше олоғая төшкәс кенә аңлай башлай. Сәйфулла ағай Дилмөхәмәтов ағай әйтә торғайны: "Ҡурайсы ҡырҡҡа етһә, йөрәгенә моң керә", - тип. Ошо йәшкә еткәс, ысынлап та, халыҡ көйҙәрен бер ниндәй үҙгәртеүһеҙ, боронғоса тыңлауға ҡайтаһың. Мин уны үҙемдән дә беләм. Ҡурай моңон, оҙон көйҙәрҙе тыңлағың килә башлай, еңел-елпе көйҙәр ҡолағыңа салынмай ҙа. Йәшерәктәр ундай тәрән моңдо аңлап та етмәй, сөнки бәләкәйҙән халыҡ йырҙарын тыңлап үҫмәү ысын сәнғәтте аңлауға ҡамасаулай. Шуға күрә бөгөн оҙон көй башҡарыусылар концертына күпселектә ололар йөрөй. Мәктәптәрҙә, балалар баҡсаһында халыҡ көйҙәренә таянып эш иткән, уларҙы белгән уҡытыусылар бик аҙ. Төп эше киләсәк быуынды тәрбиәләү булған һөнәр кешеләренә башҡорт халҡының моңон, телен, ғөмүмән, рухи мәҙәниәтен белеү мотлаҡ, тигән фекерҙәмен. Әгәр ҙә эште шунан башлаһаҡ, бәлки, йәштәр боронғо оҙон көйҙәрҙе аңлай һәм ярата башлар ине? Кеше дүрт-биш йәшенән үк халыҡ моңо солғанышында үҫә икән, киләсәктә халыҡ йырсыларын, мәшһүр ҡурайсыларҙы аңлай алырлыҡ кимәлгә етә ала. Шуға күрә бала телен генә түгел, мәҙәниәтен дә бөтә тулылығында белергә, аңларға тейеш.

## Башҡорт халыҡ йыры энциклопедияһы

Бөгөн оло быуын ҡурайсыларының дискыларын, кассеталарын күбәйтеп сығарыу зарур. Икенсенән, башҡорт халыҡ йыры энциклопедияһы һымаҡ диск хаҡында күптән уйларға ваҡыт. Мәшһүр ҡурайсыларыбыҙ, йырсыларыбыҙ башҡарылышындағы яҙмаларҙы өлгө итеп, берәй хрестоматия төҙөү беҙҙең ҡулдан килә бит. Киләсәк быуынға беҙ халыҡ гәүһәрҙәрен түкмәйенсә, сайпылтмайынса, тапшыра алыр инек. Көйҙө китап, нота буйынса өйрәнеү йәштәргә ныҡ ҡыйынға тура килә. Ишҡәле Дилмөхәмәтовтың, Йомабай Иҫәнбаевтың уйнауын тыңлау йәштәргә ғәйәт файҙалы булыр ине.

Конкурстарҙа һәр бер көй төрлө вариантта уйнала. Ҡайһы бер конкурстарҙа ошо нигеҙҙә аңлашылмаусанлыҡтар ҙа килеп сыға. Шуға ла боронғо йырҙар тупланмаһынан диск йә кассета сығарырға кәрәк ине. Ошо яҙмаларҙы шулай уҡ мәктәптәргә лә таратырға мөмкин бит - башҡорт теле, әҙәбиәте, мәҙәниәте дәрестәрендә уҡыусылар кинәнеп өйрәнер ине.

## Мине уҙған уҡыусыларым

Уҡытыусы үҙен уҙып китерҙәй алмаш әҙерләһә генә ысын уҡытыусы булып ҡала. Ринат Камалов исемле уҡыусым Йомабай Иҫәнбаев исемендәге Республика ҡурайсылар конкурсында еңеп сыҡты. Мин үҙем иһә бер ҡасан да ҡурайсылар бәйгеһендә беренсе урын алғаным булманы. Шул уҡ егет Халыҡ-ара ҡумыҙсылар бәйгеһендә лә беренсе урын яуланы. Хәҙерге көндә ул Санкт-Петербургта Римский-Корсаков исемендәге консерваторияның симфоник-дирижерлыҡ бүлегендә әҙерлек курсында уҡып йөрөй. Уҡыу йортона инеп китһә, симфоник оркестрҙың дирижеры һөнәрен үҙ-ләштерәсәк. Ул ҡурайҙы бик ныҡ ярата, әммә белемен артабан камиллаштырырға теләй икән, был аҙым хуплауға ғына лайыҡ. Бейеүгә килгәндә, дүрт уҡыусым Фәйзи Ғәскәров исемендәге Башҡорт дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамблендә эшләй.

## Үҫештә

Хәҙерге көндә ҡурай сәнғәте үҫеш осоронда, тип әйтеү хилаф булмаҫ. Хөкүмәттең дә ярҙамы бик ныҡ тойола. Әгәр аяҡ салмаһалар, ҡамасауламаһалар, уның киләсәге өмөтлө булмаҡсы. Роберт Юлдашев ҡурай сәнғәтен Мәскәү кимәленә күтәрҙе. Әгәр ҙә Рәсәй эстрадаһы йондоҙҙары (Гарик Сукачев, Николай Носков) ҡурай тауышы моңон үҙҙәренең йырына ҡушып башҡара икән, ул әрмәндәрҙең дудугы һымаҡ, донъя кимәлендә таныласаҡ, тигән өмөт бар. Йәһәтерәк ҡурай сайты асырға, беҙҙең ҡурай моңон Интернет селтәрҙәренә ебәрергә кәрәк. Ҡурай моңо бик яғымлы, тәрән, ул ниндәй ҙә булһа кинофильмды, сәхнәне биҙәй алыр ине...

**Шулай итеп...**

**Учалыла ошондай Ижадсы йәшәп ята, ижад итә, ҡурайҙа уйнай, бейей, өзләй, халыҡ ижады ынйыларын йыя. Рәис Низаметдинов кеүек таланттар барҙа Матурлыҡ донъяһының ишеге бер ҡасан да ябылмаҫ, һуҡмағынан кеше аяғы өҙөлмәҫ кеүек. Тағы ла шуныһы: Матурлыҡ донъяһында шундай уҡ матур күңелле кешеләр йәшәһен ине...**

**Ләйсән САБИТОВА әңгәмәләште.**

***✓ Беренсенән, үҙ тамағын туйҙырыр өсөн картуф баҡсаһында соҡсонған яҙыусының әҫәр ижад итеү ҡайғыһы һәм ваҡыты булмаясаҡ, икенсенән, ижтимағи ойошма ижадсының йәшәү минимумын тәьмин итеү менән шөғөлләнергә бурыслы.***

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Бөгөн Башҡорт дәүләт филармонияһында ҡурайсылар берлеген ойоштороу йыйыны үтә. Профессиональ ҡурайсыларҙың инде нисәнсе быуыны үҫеп етеүгә ҡарамаҫтан, ҡурайҙы һаҡлау, үҫтереү һәм пропагандалау буйынса профессиональ ижтимағи ойошманың булмауы үҙен ныҡ һиҙҙерә. Был йәһәттән Башҡортостан ҡурайсылар берлеген ойоштороу, уның эшен йәнләндереү буйынса күп һөйләнелде, әммә әлегә барыһы ла һүҙ һөйләү кимәленән үтмәй. "Ҡурайсылар берлеге ниңә кәрәк?" тигән һорау менән ҡурайсы Рөстәм БАҺАУВҠА мөрәжәғәт иттек. Ул килтергән дәлилдәрен, фекер-тәҡдимдәрен бер нисә өлөшкә бүлде:**

# ДИПЛОМҺЫҘ ҠУРАЙСЫЛАР,

## дипломлы башҡарыусылар бар...



✓ Беҙ иҫ киткес тарҡаубыҙ, шуға ла һәр кем ҡурайҙы үҙ яғына тарта. "Минбеләмдәр" үтә күбәйеп китте. Ағайҙар беҙҙе ғәфү итһен, һаман да бер-береһе менән булышыуҙан бушамайҙар. Бәхәсте инҡар итмәйем - ул алға этәреүсе көс, тик дәғүәләшеү профессиональ кимәлдә, шәхси ыҙғышыуҙан юғары булырға тейештер. Һәр хәлдә, союз булһа, был бәхәстәрҙе уның секция эшенә күсереү файҙаға ғына булыр ине. Беҙҙең ут күршеләр ҡурайҙы "Интернет"та үҙҙәренеке итеп теркәп тә ҡуйған, тышына Ишмулла Дилмөхәмәтовтың фотоһын ҡуйып, китап та сығарғандар. Әгәр ҙә ҡурайсылар союзын беҙ ойоштормаһаҡ, ҡурайыбыҙҙы яҡламаһаҡ һәм һаҡламаһаҡ, ул союзды ут күршеләребеҙ ойошторасаҡ бит. Ул сағында халҡыбыҙ алдында беҙгә оят буласаҡ.

✓ Һаман да ҡурайға патент алынмаған, "Интернет"та бер-ике мәҡәләнән башҡа әйбер юҡ. Ҡурайҙы юғары уҡыу йортонда башҡа барлыҡ музыка ҡоралдары кеүек профессиональ кимәлдә эҙмә-эҙлекле уҡытыу методикаһы эшләнмәгән, дәреслектәрҙе, методик күрһәтмәләрҙе яңыртып, күп данала баҫтырып сығарыуҙы тиҙләтеү фарыз. Әлеге уҡытыу методикаһы, минеңсә, бик примитив. Ғата Сөләймәнов методикаһын мин инҡар итмәйем, әммә минут һайын үҙгәреп торған заман һәр эшкә яңылыҡ индереүҙе талап итеүен аңларға бурыслыбыҙ.

✓ Ҡурайға өҫтәмә уйымдар, клапандар ҡуйыла. Бер фотола Ғата Сөләймәновтың ҡулындағы үлән ҡурайға ҡуйылған өҫтәлмә клапанды ла күргәнем булды. Был яңылыҡҡа һис тә ҡаршылығым юҡ, тик ул музыка ҡоралдары ҡурай тип аталырға тейеш түгел. Оркестрҙа ҡурайсының бер туҡтауһыҙ ҡурайҙарын алмаштырып тороуы тамашасыға йәмһеҙ булып күренеүе бар. Ҡайһы саҡта ҡурай шаптырлап иҙәнгә төшөп тә кителәй. Клапанлы музыка ҡоралдары ошо саҡта кәрәк. Әгәр ҙә ҡурайсылар берлеге булһа, ошо мәсьәлә үҙ-ара бәхәс, дәғүәләшеү формаһын алмаҫ ине.

✓ Ҡурайсы булыу - юғары исемгә, үҙенсәлекле башҡарыу оҫталығына эйә булыу, шәхес булыу, тигәнде аңлата. Үҙен күрмәйенсә, яҙмаһын тыңлап ҡына ла кем уйнағанын танығанды ғына мин ҡурайсы тип атай алам. Ундайҙар, үкенескә ҡаршы, күп түгел. Ә ҡалғандарын кем тип әйтергәме? Улары ҡурайсы түгел, ә башҡарыусы ғына. Уҡыу йорттары, асылда, бер төрлө һыҙғыртып, бер төрлө күкрәккә һалып уйнаған ҡурайсыларҙы әҙерләй. "Ҡурайҙың тауышы флейтаныҡы кеүек таҙа булырға тейеш", тигән фекер ҙә йәшәй. Был - үҙенсәлекле уйнауҙы юҡҡа сығара торған стилизация мәктәбе. Беҙҙә дипломлы башҡарыусылар һәм дипломһыҙ ҡурайсылар ҙа бар. Ҡурайсылар берлегендә "Импровизацион уйнау", "Традицион уйнау" секциялары эшләһә, үҙенсәлекле башҡарыу манераһына эйә булған ҡурайсыларыбыҙ артыр ине.

✓ Мостай Кәрим Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйеслеге дилбегәһен үҙенән һуң килгән рәйескә тапшырғанда "Һин яҙыусыларҙан картуф сәстермә!" тигән. Был һүҙҙәрҙә тәрән мәғәнә ята. Беренсенән, үҙ тамағын туйҙырыр өсөн картуф баҡсаһында соҡсонған яҙыусының әҫәр ижад итеү ҡайғыһы һәм ваҡыты булмаясаҡ, икенсенән, ижтимағи ойошма ижадсының йәшәү минимумын тәьмин итеү менән шөғөлләнергә бурыслы. Был хәл ҡурайсыларға ла ҡағыла. Минеңсә, изге ҡурайыбыҙҙың шөһрәтле тауышы ҡурайсының тамағын туйҙырыу маҡсатында ғына яңғырай башлаһа, унан сыҡҡан аһәң моң булыуҙан туҡтай. Ҡурайсылар берлеге эшләй башлаһа, ҡурайсыларыбыҙ социаль яҡтан яҡлаулы уҡ булмаһа ла, хәстәрле булыр ине.

✓ Ҡурайсылар берлегенә өҙләүселәрҙе лә, думбырасыларҙы ла, ҡурай яһау оҫталарын да мотлаҡ ҡабул итергә кәрәк. Музыка ҡоралдарын баһалау комиссияһы ла берлек нигеҙендә барлыҡҡа килһә, уларҙы етештереү эше үҙенән-үҙе яйға һалыныр ине. Ябай ғына бер мәсьәлә: республикабыҙҙың яртыһы урман менән ҡапланһа ла, бөгөн оҫталар шпонды Мәскәүҙән ташый. Шулай уҡ берлек базаһында музыкаль студия, башҡа төрлө етештереү цехтары асылһа, киләсәктә берлек үҙенең штатын үҙе тота алыр ине.

✓ Бейеү сәнғәтебеҙ дәүләт кимәлендә Ф. Ғәскәров исемендәге Башҡорт Дәүләт бейеүҙәре ансамбле йөҙөндә яҡлау тапҡан. Башҡортостан ҡурайсылар берлеге эшмәкәрлеге лә киләсәктә Башҡортостан "Ҡурай" дәүләт предприятиеһы ойоштороуға йүнәлтелһә, ҡасандыр Әҙһәм ағай Исҡужин хыялланған изге эштәр тормошҡа ашыр, ҡурайыбыҙ тулы кимәлендәге дәүләт яҡлауын табыр ине.

**Әмир ҒҮМӘРОВ**
**яҙып алды.**

*ҺАБАҠТАР*

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ... ҠАТМАРЛЫ ФЕКЕРҘӘРЕ

## Ун йәлләүсенән бер йүнләүсе артыҡ

**Эңерҙә көтөүсе малын ҡыуып ҡайтып килһә, бер өй артына халыҡ йыйылған. Көтөүсе ни булғанын белергә тип улар эргәһенә бара. Баҡтиһәң, бер Алла бәндәһе нимәлер ашап, эсе ташып яфалана икән. Уңайһыҙ хәлгә ҡалыусының туғандары, күрше-тирәһе уның ҡайғыһын бүлешә, уфтана, йәлләй бахырҙы, һәр ҡайһыһы кемуҙарҙан кәңәш яуҙырып ҡына тора.**

-Ҡасандан бирле ауырый был бисара, - тип һораған көтөүсе.

-Таңдан бирле, - тип уфтанған халыҡ.

Ошо һүҙҙәрҙе ишеткән көтөүсе, сыбыртҡыһын шартлатып, халыҡты йырып, атын сырхауға табан йүнәлтә. Халыҡ тирә-яҡҡа һибелә. Күҙҙәре аларған һыбайлы көтөүсенең өҫтөнә менеп етеп килгәнен күргән мәхлүк тороп йүгермәһенме. Көтөүсе уны башҡаларҙан ҡайырып алып, сыбыртҡыһы менән осаһына, балтырҙарына әләктерә-әләктерә, баҫтыра башлай. Манма тиргә батырып, ауылды бер әйләндереп йүгертеп алып килә был ауырыуҙы. Ҡапҡаһы төбөнә хәле бөтөп килеп йығыла меҫкен. Шунда сәсәй-сәсәй ҡоҫорға керешә. Бәҙрәфкә йүгереп инеп киткәс, көтөүсе ҡәнәғәт төҫ менән:

-Хәҙер ҡайтып сәй эсәм дә, еңелерәк сыбыртҡы алып киләм, - тип әйтә икән.

Туҡмалғыһы килмәгән сырхау, бисара, тағы ла сығып йүгергән. Ауылды өс урағас ҡына уның хәле еңеләйә. Иртәнсәк малын көтөүгә ҡыуырға хужа кеше үҙе сыға.

-Ҡорҙаш, ниңә кисә, әйҙә йүгерәйек, хәлең еңеләйер, тип кенә әйтмәй, кеше алдында сыбыртҡы менән рисуай иттең, етмәһә, баҫтырҙың, - тип үпкәһен белдерә ул.

-Бөтә ауыл йәлләүенә мин дә ҡушылһам, һин ырғып тороп йүгереп китер инеңме икән, ай-һай, - ти уға көтөүсе.

Эйе, кәңәшселәр күберәк булған һайын бер фекергә килеүе ҡыйын шул. Малының эсе ташһа, кеше ни эшләргә белә, кәңәш һорап йүгереп йөрөмәй бит. Сыбыртҡылай-сыбыртҡылай ҡыуып алып китә, был юл менән уның ашҡаҙанын эшләргә мәжбүр итә. Көтөүсе тормоштан алған ошо тәжрибәһен ҡулланған да инде.

Ун йәлләүсенән бер йүнләүсе артыҡ. Башҡаларҙың бындай тәжрибәһе булмаған тиһеңме? Булған, әлбиттә. Көн кеүек асыҡ дәлил, әммә һәр кем был тәжрибәһен ғәмәлдә үҙ хәжәтенә егә беләме?

Мең эште белеүҙән, бер эште эшләй белеү артыҡ, тип әйтә халыҡ. Хаҡ әйтә! Бөгөнгө болғаныраҡ заманда башҡа килеп төшкән иреклектән, иркенлектән баҙап ҡалғандар ҙа әҙ түгел. Әллә оҙаҡ алданыуҙарҙан, әллә үҙенә ышанмауҙан, яланда яңғыҙ ҡалған алмағас кеүек сайҡала бәндә.

Ысын йәшәйештең йылы яҙы килде тормошобоҙға. Япраҡ ярырғамы, сәскә атырғамы-юҡмы, тип аптырашабыҙ һаман. Емеш биреү тураһында уйҙа ла юҡ. Оҙаҡ икеләнеп ултырып, олонобоҙға ҡорт төшмәҫ, йә тирә-йүнебеҙҙәге иң уңдырышлы ерҙәребеҙҙе әрем, дегәнәк, кесерткән, башҡа ҡый үләне баҫмаҫ, тимә. Борон ҡарттар:

Ямантауҙы һаттыҡ бер тәңкәгә,
Баярҙары менде елкәгә,-

тип ҡайғырышҡан һымаҡ, беҙ ҙә бер заман:

Еребеҙҙе һаттыҡ бер тәңкәгә,
Килмешәктәр тейҙе теңкәгә.
Үҙебеҙҙе егеп бер тәртәгә,
Етеҙҙәре менде елкәгә,-

тип йырламаҫ элек, ойоп барған тәнебеҙҙе, йәнебеҙҙе, аңыбыҙҙы дер һелкетеп, бай тәжрибәбеҙҙе эшкә екһәк, тиҙерәк емештәрен дә йыйыр инек. Әрһеҙләнеңкерәп йәшәгән мәлендә өлгәшкән уңыштарына ҡәнәғәтләнеп, бөтмәҫ-төкәнмәҫ байрамдар, мәжлестәр ҡороп, вайымһыҙ йәшәү рәүешенә күскән һәм, һөҙөмтәлә, тарихта исеме генә ҡалған бөйөк империяларҙың яҙмышы беҙгә таныш түгелме, һабаҡ, тәжрибә түгелме? Иманым камил: тормош күңел асыуҙарҙан ғына тормай, икмәге лә кәрәк.

Ленин бабай заманында: "Кире һөҙөмтә лә - һөҙөмтә!" - тип, матур һүҙ өсөн генә әйтмәгән. "Нишләп эшләп ҡараманым", тип үкенеүҙән, "Эшләһәм дә, уңманым", тип үкенеү мең мәртәбә артыҡ, минеңсә. Уңышһыҙ һөҙөмтәнең дә шул уҡ хатаны ҡабатламаҫлыҡ фәһеме бар. Һәр һөҙөмтә, ғәмәлдә, баһалап бөткөһөҙ тәжрибәгә әйләнеүе менән файҙалы.

Диванда уңышлыға көнләшеп ятырға түгел, ә, ырғып тороп, арҡырыны буйға һалыу буласаҡ уңыштарға тәүге аҙым булһын! Ниәт иткән, моразына еткән!



**Урал**
**МОСТАФИН.**

**(Дауамы. Башы 14-се һанда).**

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

# Юлдашевмы? Ул Мәскәүҙә, Японияла...

**Мәшһүр ҡурайсыбыҙ Роберт Юлдашев апрелдә тағы ла Японияла концерттар бирәсәк. Был уның Ҡояш сығышы иленә икенсе тапҡыр сәйәхәт ҡылыуы. "Япондар ҡурай моңон бик ярата, - ти ул. - Ҡурай уйнай башлаһаң, бөтөн донъяларын онотоп тыңлайҙар..."**



Эйе, ҡурайҙы бер япондар ғына түгел, башҡа халыҡтар ҙа баһалай. Ул бигерәк тә Роберт Юлдашев кеүек виртуоздар ҡулында аҫыл хазинаға әйләнә. Ошо көндәрҙә Өфөлә Рәсәйҙең эстрада йондоҙҙарының береһе Николай Носковтың концерты үтте. Йырсы беҙҙең Роберт Юлдашев менән бик ихлас хеҙмәттәшлек итә. Роберт уны уҡытыусыһы, Рәсәй шоу-бизнесы донъяһына сығырға ярҙамлашыусыһы тип иҫәпләй. Николай Носковтың һуңғы альбомындағы 12 йырҙың унауһында ҡурай моңо сағылыш тапҡан. Ошо альбомының презентацияһын үткәрҙе лә инде йырсы Өфөлә.

Роберт әйтеүенсә, Николай Носков менән берлектәге сығыштарҙан һуң ҡурайсыға башҡа Мәскәү төркөмдәре лә хеҙмәттәшлек итеү тәҡдиме менән сыҡҡан. Шулай уҡ танылған йырсы Гарик Сукачевтың яңы альбомында ла ике йыр ҡурай моңо аҫтында йырлана.

Проекттар, тәҡдимдәр күп булыуға ҡарамаҫтан, Роберт Юлдашевтың үҙ ҡарашы, үҙ талабы бар: "Түбән зауыҡлы, йөкмәткеһе, мәғәнәһе булмаған йырҙарҙа ҡурай моңо яңғырай алмай", ти ул.

ИНТЕРНЕТ СЕЛТӘРЕНӘН

# КҮРҺӘТЕГЕҘ ӘЛЕ ИЛДЕ, йәки Рәсәй тураһында ни беләбеҙ?

**Һандарҙы алдап булмай. Ошоно иҫәпкә алып, һандар ярҙамында Рәсәйҙе күҙаллап ҡарайыҡ.**

**Илдең ҙурлығы**

Рәсәй Федерацияһының территорияһы 17 075 400 кв.км, ошо күләмдең 45 проценты Поляр түңәрәктә, йәғни мәңге боҙлауыҡта урынлашҡан. Дәүләт сиктәренең оҙонлоғо 58 322 км. Халыҡ йәшәгән ауыл-ҡалаларҙың иҫәбе - 157 895, уларҙың 30 меңдән ашыуында әле булһа ла телефон элемтәһе юҡ, 29 меңендә хатта кешеләр ҙә йәшәмәй. Ташландыҡ ауыл-ҡасабаларҙың иң күбеһе Себер, Төньяҡ-Көнбайыш федераль округына тура килә.

Бөгөн Рәсәйҙә 16 төбәк кенә иктисади яҡтан үҙаллы йәшәй ала. Уларҙың 13-ө генә донор-төбәктәр рәтенә инә.

**Халыҡ иҫәбе**

Рәсәй халҡының дөйөм иҫәбе һуңғы иҫәпләүҙәр буйынса яҡынса 134 000 000 кешене тәшкил итә. Уларҙың 73,1% (97 954 000) ҡалаларҙа һәм ҡасабаларҙа, әйтәйек: Мәскәүҙә - 9 269 000, Мәскәү өлкәһендә - 6 900 000, Санкт-Петербургта - 5 897 000, Ленинград өлкәһендә 2 350 000 кеше (сит илдән килгән рәсми теркәлмәгән мигранттарҙы иҫәпкә алмағанда) йәшәй.

Дөйөм халыҡтан 87 100 000 кеше, йәғни 65 проценты пенсия йә пенсия алды йәшендәге кешеләр; 1 857 000 - төрмәлә ултырыусылар һәм төрмәләрҙә тороусы енәйәтселәр; 5 900 000 - эшһеҙҙәр (Рәсәй статистика үҙәге мәғлүмәте); 2 489 000 - даими рәүештә сит илдә йәшәүселәр.

114 092 000 кеше дәүләт ҡаҙнаһы иҫәбенә йәшәй һәм бер нәмә лә етештермәй. Беҙ ҡалған 19 908 000 кеше иҫәбенә йәшәйбеҙ, йәғни һалымдың тос өлөшөн улар түләй.

Рәсәй халҡының биштән бер өлөшө генә илдәге хәл-ваҡиғаларҙы ыңғай һәм йәшәйеште тыныс тип билдәләй. Халыҡтың яртыһынан күберәге (51%) Рәсәйҙең яңылыш йүнәлештән китеүен, ә 38% дөрөҫ курс буйынса барыуын белдерә.

Үҙҙәренең матди хәлен 18% халыҡ һәйбәт, 54% ауыр, ләкин түҙерлек, тип һанаһа, 24% "башҡа түҙерлек хәл юҡ" ти. 14% иһә яҡын киләсәктә байыясаҡтарына инана, 22% ,киреһенсә, тик насараясаҡ тип иҫәпләй. 24% Рәсәйҙе иктисади талаптар менән пикеттарҙа ҡатнашырға риза, былтыр был һан 17% булған. 19% забастовкаларҙа ҡатнашырға теләй. Хөкүмәттең эшен 61% халыҡ хупламай, хуплаусылар иһә 34% ҡына. 2004 йылдың рәсми мәғлүмәттәре буйынса Рәсәйҙә 29,8 % ярлы иҫәпләнгән, йәки был дөйөм халыҡтың 20,8%. Байҙар менән ярлыларҙың килемдәре араһында ҙур айырма һаҡлана. Мәҫәлән, 2006 йылда был күрһәткес 15,6 тапҡырға тигеҙ булһа, 2003 йылда 15 тапҡырҙы тәшкил иткән.

Рәсәйҙең 20 миллион халҡы үҙен рәсми рәүештә мосолмандар рәтенә индерһә, ысын православныйҙар иһә 4,5 проценттан да артмай, дөйөм алғанда яҡынса 6 миллион кеше. Хәҙер Мәскәүҙә Баҡуға ҡарағанда ла күберәк әзербайжандар, Ҡазанға ҡарағанда ла күберәк татарҙар йәшәй. Быуат уртаһына кәмендә һәр дүртенсе рәсәйле мосолман буласаҡ.

Рәсәй Хоҙай барлығын инҡар итеүсе илдәр исемлегендә ун икенсе урынды биләй. Илебеҙҙең 48 процент халҡы үҙен атеист тип таный.

Бөгөнгө көндә Рәсәйҙә яҡынса 12 миллион ғәрип йәшәй. Шулай уҡ Рәсәйҙә рәсми теркәлгән 870 000 наркоман, 1 580 000 алкоголик, 978 000 психик сирле, 370 000 туберкулез, 22 400 000 гипертоник, кәмендә 960 000 ВИЧ инфекцияны иҫәптә тора. Аналитиктар фараҙдарына ярашлы, 2010 йылда Рәсәйҙә 8 миллион инсан СПИД менән ауыраясаҡ.

***Мәҡәләне әҙерләгәндә мәғлүмәт агентлыҡтарының асыҡ материалдары, Газета.RU, News.RU, InoPressa, RBC Daily, BBC, CNN, CIA, Reuters, "Эхо Москвы" радиоһы һәм башҡа Интернет сығанаҡтары ҡулланылды.***

**(Дауамы бар).**

ӘСТӘҒФИРУЛЛА!

# SMS-хәбәрләшеү

## Ауырыумы, әллә алама ғәҙәтме?

**Эскелек, тәмәке тартыу, наркоманлыҡты алама ғәҙәт категорияһынан сиргә, "психик бәйлелек"кә күсереп, төрлө ысулдар менән дауалауға мохтажлыҡ тыуыуы тураһында күп һөйләйбеҙ. Әммә һуңғы осорҙа табиптар, бигерәк тә көнбайыш табиптары, төрлө уйын автоматтары манияһы менән бер рәттән, компьютер уйындары, хатта SMS яҙыуҙы ла психик ауырыу төрҙәренә индереү яғында. Баҡһаң, "SMS-мания" тигән психик бәйлелек менән үҫмерҙәр генә түгел, ярайһы уҡ оло йәштәге, тормошта үҙ юлын тапҡандар ҙа ауырый башлаған. Европала инде SMS-эпидемия тураһында ла һүҙ ҡуҙғаталар. Кеҫә телефонынан ҡыҫҡа текстар ярҙамында аралашыу ни өсөн мауыҡтырғыс һәм нимәһе менән ҡурҡыныс икән?**



ЯҢЫ МАНИЯМЫ?

Британияла ғына инде тиҫтәләгән кешегә "SMS-бәйлелек" диагнозы ҡуйылған. Күбеһе үҫмерҙәр. Әммә араларында өлкән йәштәгеләр ҙә бар. Прайори клиникаһының алама ғәҙәттәр бүлеге етәксеһе Марк Коллинз шуны күҙәткән: ауырыуҙар тәүлегенә ете сәғәт буйы SMS яҙған! Ҡалған ваҡытта минут һайын, тағы ла берәр хәбәр килмәнеме икән, тип, телефонын тикшергән.

Шотландияла йәшәгән 20 йәшлек егет һөйгәненә аҙнаһына 700-ләп SMS-хат ебәргән. Тап ошо бәйләнеш өсөн генә 8 мең долларға яҡын сығым киткән. Эшләгән урынында егеттең оҙаҡ ваҡыт SMS-хат яҙып ултырыуын хужаһы ла һиҙгән. Өҫтәүенә, егет 8000 электрон хат та ебәргән булған. Уны эшенән ҡыуып, д а у а л а н ы р ғ а ебәргәндәр...

-SMS бәйлелек - етди ауырыу ул. Аң-белем үҫешен тотҡарлай һәм финанс юғалтыуҙарға килтерә. Германияла 380 мең тирәһе кеше ошо сирҙән яфалана, - ти немец психотерапевты Андреас Хертер. Уның пациенттары араһында бер ғаилә булған. Ир менән ҡатын бары тик SMS ярҙамында ғына аралашҡан. Аш өҫтәле артында ҡапма-ҡаршы ултырып, сәғәттәр буйына берберенә хат яҙышҡан улар. Эш түшәккә килеп еткәс, кеҫә телефонын ҡайҙа ҡуйғандарҙыр, билдәһеҙ...

НИМӘҺЕ ЫЛЫҠТЫРА?

Ни өсөн шундай ылыҡтырғыс был SMS-хәбәрҙәр?

- Яңы SMSта һәр саҡ ниндәйҙер ҡыҙыҡ хәбәр була. Хәбәр алып, үҙең дә шуға яуап яҙып ебәрһәң, күңел тынысланған кеүек була! - тип яуапланы миңә Сибай ҡалаһынан 19 йәшлек Таһир. Ә инде Өфө-Сибай поезында телефонынан күҙен дә алмай, бер туҡтауһыҙ SMS-хат ебәргән Светлана исемле йәш ҡыҙ:

- Әлләсе, телефондан һөйләшкәндә башҡаларға ҡамасаулаған кеүекһең. Былай ҙа, бер үҙең ҡалғанда күңелһеҙ булып китһә, тотаһың да SMS яҙып ебәрәһең. Тиҙ ҙә, ҡыҙыҡлыраҡ та. Телефондан йәһәт кенә һөйләшәһең дә хәбәрең бөтә лә ҡуя. SMS-ты оҙаҡ итеп тә, берәр, икешәр һүҙ менән дә яҙырға мөмкин. Аҙаҡ түҙемһеҙләнеп яуап көтөүе ҡыҙыҡ, - тине.

Уйлаһаң, нимәһе насар инде. Һөйләшеп торғансы, бер-ике ауыҙ һүҙ яҙҙың да ебәрҙең. Ваҡыт та аҙ китә кеүек. Тәү ҡарауға ғына шулай тойола икән. Мин үҙем бик мауыҡмайым быңдай "һөйләшеү ҙәр" менән. Шулай ҙа, бер осор шулай аралашырға маташтым. Кәрәкле хәрефте теҙеп, мөмкин тиклем ҡыҫҡараҡ текст яҙыу өсөн ярайһы уҡ баш ватырға тура килде. Яуап көтөүе яҙыуҙан да ғазаплыраҡ ине. Башҡа бер ниндәй ҙә уй килмәй, ҡулға эш бармай. Әллә барып етте микән тырыша-тырмаша яҙған хәбәрем, әллә юҡ. Көтәм дә көтәм. Ниһайәт, килде! Ныҡ ҡыҫҡартылған, урыҫ хәрефтәре менән яҙылған башҡорт һүҙҙәрен көс-хәл менән "тәржемәләп" уҡып бөттөм! Нимәләр етмәй бит әй. Нимә? Аңламайым. Башҡа былай хат яҙғы ла килмәй, танышымдың нимә теләгәнен тулыһынса белә лә алманым. Шылтыратырға тура килде. Ике-өс минутлыҡ һөйләшеү барыһын да үҙ урынына ҡуйҙы. Ҡыҙыҡ өсөн сәғәткә ҡараным: SMS-хат алышыу ваҡыты минең ғүмеремдең теүәл бер сәғәт ваҡытын "урлағайны" инде. Өҫтәүенә, SMS-хәбәрләшеү 10 һумдай аҡсамды урланы, ә телефондан һөйләшеү өсөн 2-3 һум етә ине.

SMS хат тураһында ыңғай фекерем дә бар. Беҙгә йыш ҡына Белорет юлынан Баймаҡҡа ҡайтырға тура килә. Беләһегеҙҙер, Белорет районын аша үткәнсе бейек-бейек тауҙар артылырға кәрәк. Ә тауҙың итәгендә телефон бәйләнеше өҙөлә лә ҡуя. Ҡайтып килгәнеңде туғандарға нисек белгертергә? Тап SMS-хат был осраҡта ярҙам итә лә инде. Тау башына менеп еткәс кенә,

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

# Йылайыр мәҙәктәре



**Һәр районның, һәр ауылдың үҙенә күрә лаҡап тыуҙырыусы кешеләре була. Уйлап сығарылмаған, ә тормош-көнкүрештән алынған хәл-ваҡиғалар, телдән-телгә ҡуйыртылып, өҫтәмә биҙәк-төҫтәр менән байытылып, артабан хатта берәй әҙәби әҫәргә лә инеп китә.**

**Беҙҙең Йылайыр яҡтарында ла мәҙәк әҙәмдәр бихисап. Әле мин шуларҙың бер нисәүһенең мәҙәген "Киске Өфө"нө уҡыусыларға ла еткермәксемен. Яҡташтарымдың хәтерен ҡалдырмау, уларҙы халыҡ алдында рисуай итмәү маҡсатында исемдәрен үҙгәртеп алдым һәм ауылдарын да атамайым. Әгәр кемдер үҙен таныһа, мине ғәфү итһен һәм үпкәләмәһен. Маҡсатым һеҙҙән көлөү түгел, ә башҡорт юморының бер өлгөһө менән таныштырыу ғына.**

## "Күргәс, күрҙек, ти инде..."

Элек, колхоз-совхоздар гөрләп торған саҡта, йәйге бесән осоронда өмәләр үткәреү ғәҙәте бар ине. Эш ҡаһы яҙылмаһа ла, өмәлә ҡатнашырға теләүселәр бик күп булды. Берҙән, совхоз тәшкө аш мәләндә барыһын да бушлай ашата, өҫтәүенә, ике-өс кешегә бер "аҡ баш" ҡуя. Унан килеп, күмәкләшеп күңел асыуҙар, уйын-көлкө, йырбейеү үҙе ни тора! Мәҙәк хәлдәр ҙә йыш була ундай көндәрҙә - аҙаҡ ғүмерең буйы шуларҙы иҫләп, дуҫиштәреңә һөйләп кинәнәһең.

..."Аҡ баш"ты артығыраҡ һалып ташлағандарҙырмы, әлеге өмәләрҙең береһендә Хәббөниса инәй менән Әхүәт ағай, үткәндәр хаҡында һөйләшеп ултыра торғас, илаша башлағандар, ти. "Күрҙек бит, Әхүәткәйем, күрҙек", - тип сеңләй икән Хәббөниса инәй. "Күрҙек шул, апай, күрҙек", - тип уға ҡушыла икән тегеһе. Эргәләрендә йөрөгән ун йәштәр тирәһендәге Әхмәт быларҙы аңлай алмай, аптырашта ҡала: "Шундайын да ҡурҡыныс нимә күрҙеләр икән?"

Ауылға ҡайтҡас та атаһынан белешмәксе була Әхмәт һәм: "Атай, Хәббөниса инәй менән Әүхәт ағай нимә күргәндәр ул? Бер-береһенә илай-илай һөйләнеләр..."- ти. Эштең нимәлә икәнен артыҡ төшөнөп тә етмәгән атаһының яуабы ҡыҫҡа була: "Уның нимәһен һорайһың, балам, күргәс, күрҙек, инде..." Һорауына йүнле яуап ала алмаған Әхмәт тегеләр күргәндәрҙе атаһының да күреүенә бөтөнләй аптырап ҡала. Әхмәт әле лә ошо һорауына яуап таба алмай, ти, ә "Күргәс, күрҙек инде" тигән ләкәп әле лә телдә йөрөй.

## "Мәрйәгеҙҙең теле юҡмы әллә?"

Хәснөтдин ағайҙы "Аяклы кәмит" тип атаһаң да артығы булмаҫ: йөрөгән ерендә берәй этлек сығармай йөрөмәй.

Бер көн шулай кинйә ҡыҙын районға алып килгән. Үҙе атын

## ӘСТӘҒФИРУЛЛА!

бәйләнеш булыу менән, SMS яҙаһың да ебәрәһең (Иң яҡшыһы, хәбәреңде алдан яҙып әҙерләп ҡуйыу. Юҡһа, өлгөрмәйәсәкһең/. Шунда уҡ бәйләнеш тә өҙөлә. Әммә хатыбыҙ осто. Икенсе тауға менгәндә инде теге яҡтан килгән хәбәрҙе телефон антеннаһы тотоп өлгөрә. Шәп бит! Тап бына шундай ваҡытта аралашыр өсөн, йә иһә ниндәйҙер сәбәптән һөйләшеп, яуап бирә алмағанда, мәҫәлән, спектакль барғанда, бала йоҡлағанда, больницала һ.б. хәлдәрҙә хәбәр еткерергә SMS-хат уйлап сығарылғандыр ҙа инде.

### ЮҒАЛТЫУҘАР ҘА БАР ИКӘН

SMS-хәбәрләшеү менән мауыҡҡан кеше ваҡыт үтеү менән йәнле аралашыуҙы ситен күрә башлай. Миненсә, SMS-хәбәрләшергә яратҡан кеше башҡалар менән һөйләшеүҙән ҡурҡа. Кәрәкле һүҙҙәрҙе ваҡытында таба алмай ҡуйһам, тип уйлай. Бер таныш яңғыҙ ҡатындың һөйләгәне иҫемдә. Үҙенән тиҫтә йылға өлкән ир менән танышҡан ул. Телефон номерҙары менән алышҡандың икенсе көнөнә уҡ яңы танышы SMS-хат яҙа башлаған. Ҡатын баҙап ҡалған. Яңы танышы хаҡлы ялда булһа ла, ҡатын әлегә ярайһы уҡ ҡатмарлы хеҙмәттә ине. Эш сәғәттәрендә ул бары тик төшкө ялда ғына бер аҙ тын алып, сәй эсеп алырға форсат тапҡан. Ә SMS-хат иртә менән килә башлай икән. Ҡатын тәүҙәрәк, "аҙаҡ яуап бирермен, ваҡытым юҡ", тип яуаплап ҡараған. Ә теге остан һаман хаттар яуған. Бер, ике хат яуапһыҙ ҡалғас, үпкәләү тулы хәбәрҙәр килә башлаған. Ҡатын хаҡлы ялға сығыр алдынан яратҡан эшен юғалтҡыһы килмәгән, әлбиттә. "Төшкө ял мәлендә, хатта сәй ҙә эсә алмай ҡала инем. Иртәнән бирле килгән бер-нисә хатҡа яуап яҙып үтә ине ваҡытым",- тип хәтерләй ул шул саҡтарын. Осрашып һөйләшеп тә ҡарағандар. Шулай бер аҙҙан танышым был ирҙең ҡатын-ҡыҙҙар менән һөйләшергә тартына, хатта ҡурҡа икәнен төшөнгән. Яуаптары ла "Эйе", "Юҡ"тан ары китмәгән. Хисләнеп һөйләшеүҙе бөтөнләй аңламай икән. Хатта телевизорҙан кино ҡарағанда ла хисле урындарында йәҙә бөтөнләй үҙгәрешһеҙ ҡала. Ә инде яныңдағыларҙың көлөүен, йә бойоғоуын, фильмдағы геройҙар менән бергә илауын күңел сөсөләгә, ир-аттарға хас булмаған сифат тип ҡабул итә икән. Шулай бер аҙҙан ҡатын уның SMS-хаттарынан тамам биҙеп, араларҙы өҙөргә уйлаған. Нисек, тиһегеҙме? SMS-хаттарҙан әрләшеп тә, ситкә күсеп китеп тә ҡасып ҡотолоп булмай бит. Танышым, уның номерын белгән бик күп таныштарын үпкәләтһә лә, иҫке сим-картаһын атып бәргән дә яңыһын алған. Әле лә, һирәкләп мин ул ҡатынға SMS-хат ебәреп ҡарайым. "Телефондан яҙышыу шул тиклем үҙәгемә үткән, башҡа яҙма, шылтырат ҡына", - тип үтенде ул минән.

### ҠУЛДАРҘЫ ҺАҠЛАҒЫҘ!

Ваҡ ҡына төймәләргә йыш-йыш баҫып ултырыуҙан ҡул суктарының тарамышталары тала икән. Хатта "Профессиональ" ауырыуҙар исемлегендә лә теркәлгән был сир. Исеме RSI. Тәржемә иткәндә "Ҡабатланған хәрәкәттәрҙән барлыҡҡа килгән имгәнеү" була. Табиптар билдәләүенсә, йыл һайын 4 миллионға яҡын кеше ошо сиргә юлыға. Һуңғы биш йылда ауырыуҙар һаны 38 процентҡа артҡан.

RSI бер бармаҡ менән кеҫә телефоны төймәләренә оҙаҡ баҫып ултырыуҙан барлыҡҡа килә. Әгәр ҙә көнөнә 60 һүҙҙән торған ун хат ебәргән хәлдә бармаҡ төймәсектәргә 600 тапҡыр баҫа! SMS-хатты йәһәт баҫыуға өйрәнгәндәр бигерәк тә тиҙерәк юлығасаҡ был сиргә.

### БЫНА ҺИҢӘ МӘ!

Психолог Гленн Уилсон тағы ла бер асыш яһаған: SMS-менән мауығып, миңрәүләнеп ҡалырға ла мөмкин. Бәхеткә ҡүрә, ваҡытлыса ғына. Уилсондың тикшереү һөҙөмтәләре буйынса, текстар ярҙамында даими аралашыу интеллект коэффициентын (IQ) 10 пунктҡа төшөргән. Ә марихуана тәмәкеһен тартыу - бары тик биш пунктҡа кәметкән.

SMS-манияның артыуын уҙ мәнфәғәтендә файҙаланып ҡалырға өлгөргән кәрәҙ бәйләнеше операторҙары көндән-көн яңы ысулдар уйлап сығара. Телефон балансын белергә теләп, хәбәр ебәреүең була, "Тиҙ генә ошо номерға SMS ебәр ҙә бөтөнләй бушлай бик матур көй яҙҙыртып ал!" тигән хәбәр килеп тә төшә. "Бушлай" тигәнгә ҡапҡан кешенең хат яҙыуы була, шунда уҡ ошо хәбәре өсөн 15-20 һумынан ҡолаҡ ҡаға ла (Шул аҡсаға бер плиталы шоколад алып ашаһасы). Йәиһә "Ҡыҙыҡ йөкмәткеле бер хатты тағы ла ике танышыңа ебәр, һиңә уларҙан күп ҡотлау килер", тип тә айыу майы һөртөп ҡуялар. Ҡыҙыҡ күреп кенә ебәрһәң дә, бернисә һумыңдан ҡолаҡ ҡағаһың. Өҫтәүенә, шундай уҡ сығымға дуҫтарыңды ла дусар итәһең. Бына шулай, 2006 йылдың тәүге ярты йылында Рәсәй кәрәҙ бәйләнеше операторҙары бары тик SMS һәм MMS-тан ғына 450 миллион доллар килем алған.

Һандарға күҙ һалһаҡ, үткән йылда Рәсәй халҡы барлығы 15 миллиард SMS ебәргән. Сағыштырыр өсөн: шул уҡ осорҙа Бөйөк Британияла 30 миллиард SMS ебәрелгән. Британлыларҙың 10 проценты көнөнә 100 һәм унан да күберәк SMS яҙа. Бына был инде ысынлап та мания! Абоненттарҙың 62 проценты хатта отпуск мәлендә лә әленән-әле, берәй хәбәр килмәнеме икән, тип телефондарын ҡарап, тикшереп тора икән. Шуларҙың һәр бишенсеһе SMS-ҡа тиҙ генә яуап ебәрер өсөн мөһим эш аңғәмәһен өҙөргә әҙер!

**Лилиә ҠӘЙЕПОВА.**

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Мин SMS-хәбәрләшергә һис тә ярамай тип әйтергә теләмәйем. Һәр нимәнең сиге була. SMS-хәбәрләшеүҙең дә ыңғай яҡтары күп. Әммә аҡыл менән, кәрәк мәлдә генә хәбәрләшеү, сикте үтмәү, бигерәк тә йәштәр өсөн тик файҙаға ғына буласаҡ. Нимә генә тиһәгеҙ ҙә, кәрәкле кеше менән телефондан һөйләшеп, уҙ тауышын, тын алышын ишетеү, йә иһә күрешеп, күҙҙәренә теклән һөйләшеү үҙе бер ғүмер ҙә инде!**

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

туғарып, ул-был иткәнсе, Кинйәбикә апайҙары йәшәгән йортҡа инеп китә. Бер аҙҙан эшен тәүәлләп, Хөснөтдин ағай ҙа өйгә инә. Эргәһенән үтеп барған салбарлы мәрйәне күргәс, ағай әҙәпле генә итеп: "Драсти!" - тип өндәшә. Тик мәрйә бер һирпелеп ҡарай ҙа өндәшмәй.

Сисенеп, түргә үтһә, әлеге мәрйә арты менән тороп алған да көҙгә алдында әйләнә икән. Бая ишетмәгәндер, тип уйлап, Хөснөтдин ағай "Драсти"һын тағы ҡабатлай. Тик мәрйә йылмая бирә лә, тағы өндәшмәй. Аш бүлмәһенән зур ҡыҙының өндәшкәне ишетелә: "Атай, ингәндән алып нимәгә "драсти"лап ҡына һөйләшәһең ул?" "Мынау мәрйәгеҙҙең теле юҡмы әллә, һаулыҡ һорашһам да, алмай ҙа ҡуя бит..." "Атаҡ-атаҡ, ул ниндәй мәрйә булһын - үҙебеҙҙең Кинйәбикә лә инде..." "Аһ-аһ, Кинйәбикә ҡулдаҡ кейеп килгәйне бит, ул ҡасан салбарланып өлгөргән...Битенә ҡарамайым да әле мин..."

### "Мәксүдә үлгән..."

Асыҡ күҙ менән йоҡлаған кешеләрҙе күргәнегеҙ бармы? Булмаһа, артабан иғтибарлыраҡ булығыҙ, юғиһә, ошоға оҡшаш хәл һеҙҙең менән дә булыуы бик ихтимал.

...Бесән өҫтө. Борон бесәнде яланда ятып эшләй инек бит. Гөлбәғиҙә инәй кашауар булып йөрөй. Бер көн төшкө аштан һуң, кешеләр бесәнлеккә китеп бөткәс, ҡыуышҡа инһә, Мәксүдә апай бер үҙе генә салҡан төшөп ята икән. Ауыҙы, күҙҙәре асыҡ, үҙе ҡыбырламай ҙа. Гөлбәғиҙә инәй баҙап ҡала: "Мәксүдә, Мәксүдә, ни ҡыланып ятаһың?" Тик йәш ҡыҙ өндәшмәй. Тамам ҡурҡыуға төшкән Гөлбәғиҙә инәй тышҡа атылға һәм бесәнселәр янына йүгерә. "Уй, Хоҙайым, ни генә булды икән, Мәксүдә үлгән дә ҡуйған. Әсәй генәһенә ҡалайтып әйтәбеҙ инде", - тип күҙ йәштәре аша һамаҡлай икән инәйебеҙ. Бөтә кеше ҡыуышҡа йүгерә. Килһәләр, Мәксүдә апай һаман шул килеш ята. Шул саҡ эштең нимәлә икәнлеген һиҙеп алған бер егет Мәксүдә апайҙың ауыҙына иплән кенә күрән (тел ҡыбырлаған һайын төпкә тартылыусы үлән) тыға.

Иҫһеҙ булып йоҡлап ятҡан Мәксүдә апай сәсәй-сәсәй тороп ултыра ла, үҙен уратып алған кешеләргә ҡарап, аптырап китә. Ауылдаштары әле булһа уның асыҡ күҙҙәр менән йоҡлауы тураһында телдән төшөрмәй һөйләй.

### "Даңғыр-дөңгөр иһа-һай..."

Ишле генә ғаиләле Шәмсетдин ағай урыҫ ауылына күсеп бара. Тәү осор балалары урыҫса бер ауыҙ һүҙ белмәй аҙаплана. Шулай ҙа тора-бара телде аңлай башлай балалар. Уртансы улдары Мирғәле нәҡ шул осорҙа лаҡапҡа ҡала ла инде.

Бер көн ҡырҙа ат эҙләп йөрөгән Мирғәлегә ауылдарындағы урыҫ ағай тап була. "Чего ишешь, малайка?" тип һорай урыҫ. Һорауҙы аңлаһа ла, Мирғәле ни тип яуапларға белмәй тора: "Даңғыр-доңғор, иһа-һай", - тип аңлата. Аҙаҡ Василий Степанович ауылда ирҙәргә һөйләй: "Вот у Шамсетдина малай боевой растет. Не пропадет он никогда. Не сумел сказать лошадь, зато "Дангир-дунгир ига-гай" говорит..."

...Шулай Мирғәлегә "Даңғыр-доңғор иһа-һай" ҡушаматы йоғоп ҡалды.

### "Бына лежит, зуб держит..."

Тел арҡаһында сыҡҡан тағы бер мәҙәк хәлде һөйләп китәйем әле. Күрше ауылдағы Әскәп инәй, үгеҙ егеп, баҙарға юллана. Әммә Спутник ауылына етәрәк үгеҙе сыбынлай ҙа ҡуя бит быныһ. Улай итә Әскәп инәй, былай итә. Әммә тиҫкәре үгеҙ, тәртә араһына төшеп ята ла, телен арҡыры тешләп, тик ята икән. Һис торғоҙормон тимә. Аптыраған инәй Спутниктағы белешенә барып килә: "Ызнакум, помоги, - ти. - Бына лежит, зуб держит, никак шагать итмәй..." Аңлап етмәһә лә, Степан ҡарт Әскәп инәйгә эйәрә. Килһә, үгеҙ һаман ята икән. Эштең айышына төшөнгән бабай әмәлен тиҙ таба - үгеҙҙең ҡойроҡ аҫтына ут төртә... Йомошон йомошлап ҡайтҡас, ҡыуана-ҡыуана үҙе һөйләгән Әскәп инәй был хәлде әхирәттәренә.

**Мотал РӘМОВ.**
Йылайыр районы.

## УҢЫШ ҠАҘАН



# Үҫергә ынтылыш

**Таш менән ынйы араһында ниндәй айырма бар? Бөтөн тере нәмә кеүек, ынйы ла даими үҫеш кисерә, ә таш нисек булған, шул көйө ҡала. Үҫеү - ул йәшәү билдәһе. Ләкин беҙ физик үҫеү тураһында түгел, ә йәшәүгә һәләтлекте күтәреү өсөн маҡсатҡа йүнәлешле үҫергә тейешлегебеҙ хаҡында һөйләшәсәкбеҙ.**

Балаларҙың уйнауын күҙәтеп тә кешелә бөтә нәмәне танып белергә, аңларға, тикшереп ҡарарға талап юғары булыуын күрәбеҙ. Улар аң кимәлен үҫтерер өсөн ололарҙан һорашып, ғүмер буйына өйрәнергә риза. Хатта теләһә ниндәй ауыр һынауҙар һәм мажаралар кисерергә әҙерҙәр. Ирекһеҙҙән, балалар ул тиклем көстө ҡайҙан ала икән, тип уйлап ҡуйһың. Бәлки, ысынлап та, үҙҙәренең рухи талабын ҡәнәғәтләндереү өсөн кешеләрҙә лә өҫтәмә көс уяналыр? Сағыштырыу өсөн уңыш ҡаҙанырға ынтылмаған, бер нимә лә өйрәнергә теләмәгән кешеләрҙе ҡарағыҙ. Улар буш ваҡытын мөмкин тиклем файҙалыраҡ итеп үткәрергә тырышһа ла, бәхетле кешене күҙ алдына баҫтырмай. Бының сәбәбе ябай: әгәр кеше нимәгәлер өлгәшергә теләмәһә, ниндәйҙер хыялдар ҡормай, маҡсатһыҙ йәшәһә, уның тормошо күңелһеҙ була, сөнки рухи ҡәнәғәтлек кисермәү көстө бөтөрә.

Яҡшы кеше булдырыуҙы төп маҡсаты итеп ҡуймаған бер генә дин дә юҡ. Донъялағы бөтөн диндәр ҙә кешенең донъяны аңлау, йәшәү, ғүмерен яҡшы итеп үткәреү, ҡотолоу, мөхәббәт тураһындағы хыялдарын һәм күңел талабын сағылдыра. Уның өсөн кеше үҙен үҙгәртергә тейеш. Кешегә: "Нисек бар инең, шул көйө ҡал", тиеүсе бер генә дин дә юҡ.

Теләһә ҡайһы иҡтисад системаһы һәм теләһә ҡайһы компанияның нигеҙе: туҡталыштың булыуы мөмкин түгел, тигән принципта ҡорола. Компания йә үҫә, йә бөлә. Ниндәйҙер бер айырым кимәлдә тоторға тырышыу дәғүәселәрең менән көрәштә еңелеүгә килтерәсәк. Теләһә ҡайһы эшҡыуар даими уҡырға, үҫергә тейеш. Юғиһә, уның эше бөлгәнлгәндән-бөлә барасаҡ.

Эдвардс Деминг сифат төшөнсәһен: "Сифат - ул ниндәйҙер айырым стандарт түгел, ә даими камиллашыуҙың етеҙ процесы", тип аңлата. Тормош законын, эволюция принциптарын боҙоп, күңел талап итеүгә ҡарамаҫтан, төрлө ынтылыштарға, иҡтисади маҡсаттарға ҡаршы килеп, бәхетле булыу мөмкин түгел. Уҡыу һәм үҫеү - тормош мәғәнәһенең айырылғыһыҙ өлөшө. Әгәр уҡып даими үҫергә тырышмаһаҡ, бер ниндәй мөғжизәләр ҙә, тылсымлы дарыуҙар ҙа беҙ теләгән нимәне алдыбыҙға килтереп һалмаясаҡ.

**Бодо ШЕФЕР.**

ТӘҘРӘ ТӨБӨМ - ГӨЛ

# Тылсым эйәләрен...

## өйөңдә тот

**Европа һәм Азия халыҡтары борондан өйҙә һәм баҡса-скверҙарҙа гөл-сәскәләр үҫтергән. Рәсәйҙә беренсе парк XҮШ быуатта ғына барлыҡҡа килгән. Йорт эсен биҙәү маҡсатында гөл үҫтереүҙе бөтөнләй хупламағандар. Бөгөн иһә сәскәләр менән биҙәлмәгән бер генә урын да юҡ. Ә йорттарыбыҙҙағы гөлдәр беҙҙең сәләмәтлекте ҡайғыртыусы тере йән эйәләре.**

Баш мейеһенең ҡан тамырҙары ҡыҫылыуы, тамаҡ ҡымырйыуы, танау ҡыуышлығының кибеүе, йыш тымаулау, аллергия - барыһы ла ҡыш көнө үҙәктән даими йылытылған фатир һауаһының ҡоро булыуына бәйле. Дымлылығы 35 проценттан түбән ҡоро һауалы фатирҙа йәшәгән кеше йыш ҡына үҙен туҡмап ташланған һымаҡ итеп тоя, бөтөн тәне һыҙлаусан була.

Һаулығыбыҙға зыянлы бөтөн бәләләрҙән тәҙрә төбөндә үҫкән гөлдәр ҡотҡара. Япраҡтарынан бүленеп сыҡҡан һыу менән улар бүлмә һауаһын дымландыра. Мәҫәлән, 22 градус йылылыҡта циперус гөлө тәүлегенә 2 литр дым бүлеп сығара. 20 кв. метр майҙанлы фатир һауаһының дымлылығы өсөн 2 литр дым артығы менән етә.

Үҫемлектәрҙең күбеһе үҙҙәренә дымдың 10 процентын ғына ҡалдырып, ҡалған 90 процентын беҙгә кире ҡайтара.

Аллергологтар туҙан менән туҡланыусы күҙгә күренмәҫ синантроп талпанының аллергия тыуҙырыуын асыҡланы. Фатирҙағы дымлы һауа - туҙан талпанының төп дошманы, сөнки дым туҙанды баҫа.

Бүлмә гөлдәре шулай уҡ һауалағы никотин, формальдегид (уны бигерәк тә ДСП-нан эшләнгән мебель бүлеп сығара) кеүек һаулыҡ өсөн зыянлы матдәләрҙе йота. Уларҙы хатта көршәктәге тупраҡ та үҙенә һеңдереп ала. Шуның өсөн гөл көршәгендәге тупраҡты йыш ҡына йомшартып, көпшәкләндереп тороу мөһим.

Компьютер экранынан төшкән яҡтылыҡ та һауаны ҡорота. Көнө буйына компьютер артында эшләгән кеше, экрандағы туҙандың яртыһын һулап, организмына зарарлы микробтар йыя. Шуның өсөн компьютер янына мотлаҡ һауаны дымландырыусы ҙур япраҡлы гөл ҡуйығыҙ.

Офтальмологтар әйтеүенсә, ҡаршындағы йәшел үҫентегә бергилке ҡараш ташлап алыу ҙа күҙҙең арығанлығын бөтөрә. Ә гөлдөң нәфис һыҙаттары күҙгә һәм бөтөн организмға ял бирә, ти.

**Яҡшы һәм яман гөлдәр булмай**

Кешеләр бүлмә гөлдәре тураһында төрлө уйҙырмалар һөйләргә ярата. Мәҫәлән, кемдер, фатирыңда беруҡ фикус, кактус һәм филодендронды үҫтермә, имеш, улар хужаларға төрлө ауырыу тарата, тиһә, икенселәре үҙенән-үҙе шытыусан каланхоэға ҡаршы, уны үҫтергәнсе, ике-өс көршәк "аҡса гөлө"н (красуля) ултыртыуың хәйерле, тип иҫәпләй. Ә ысынында гөлдәрҙең кешегә файҙаһынан башҡа зыяны юҡ.



Баҡса үҫентеләренән пион, бөтнөк, артыш төнәтмәһе һалҡын тейгәндә тамаҡты сайҡатыу сараһы булараҡ ҡулланыла. Ә йоҡлап булмағанда караүат башына уҫаҡ япрағын, йәки лаванда менән абаға бәйләмен элеп ҡуйһаң, уларҙың бигүк көслө булмаған үҙенсәлекле еҫе нервыларҙы тынысландыра. Йоҡоһоҙлоҡтан шулай уҡ ярангөл, цикламен, резедә, рауза сәскәләренән яһалған гөлләмәнең дә ярҙам итеүе билдәле. Миләш менән пижма сәскәһе, киреһенсә, йоҡоно осора.

Гипертония менән сирләүселәргә фатирында мәтрүш бәйләмен тоторға, лаванда, мелисса, валериана һәм лимон үҫтерергә кәңәш итәләр. Улар ҡан баҫымын түбәнәйтә. Баш ауыртҡанда сикәгә сирень япрағын йәбештереү файҙалы. Муйыл сәскәһенең көслө еҫе фатир һауаһында тупланған бөтөн микробтарҙы ла үлтерә.

**Үҫемлектәрҙең тағы шундай файҙаһы бар:**

фатирҙы йәмләй;

туҙанды фильтрлай;

йәй көнө һауаға һалҡынлыҡ бирә, ҡышын дымландыра;

углекислый газды кәметә;

һауаны формальдегид һәм тәмәке төтөнө ҡатнашмаларынан таҙарта;

нервыларҙы тынысландыра;

организмдың арыуҙан ҡуҙғыуын кәметә;

коллективтағы мөхитте "сәләмәтләндерә" (гөлдәр күп үҫтерелгән коллективта эшләүселәр араһында үҙ-ара татыулыҡ, бер-берен аңлаусылыҡ хөкөм һөрөүе билдәле);

бүлмәне таҙа кислород менән байыта.

БАҠСА

# АПРЕЛДӘ СӘСМӘГӘН -

## сентябрҙә уңыш йыймаҫ



**Апрель - тупраҡтың тәбиғи һут менән тулыланған, үҫентеләрҙең морон төрткән ваҡыты. Баҡса ерҙәрен органик, минераль ашламалар менән туйындыра торған мәл (был эште көҙ көнө, тупраҡ дымлы саҡта ла башҡарырға була).**

Һауа торошо 0 градустан юғарыраҡ булғанда алмағастарҙың, ҡара ҡарағат, крыжовник, аҡ һәм ҡыҙыл ҡарағат, сейә, слива ҡыуаҡтарының ботаҡтарын киҫергә мөмкин. Киҫемде махсус баҡса бысағы менән эшләп, һуңынан ҡайнатылған ыҫмала йәки майлы буяу менән һылап ҡуйырға кәрәк, әммә нитробуяу менән түгел.

Ағастарҙы төрлө ауырыуҙарҙан, ҡоротҡостарҙан һаҡлау сараларын күрергә кәрәк. Емеш ҡыуаҡтарына сыбыҡсалар ялғау, иҫкеләрен яҡшылап киҫеү ваҡыты етте. Шулай уҡ редис, кишер, орлоҡлоҡ һуған, петрушка, салат үләндәре кеүек һалҡынға бирешмәүсе культураларҙы сәсәсәк тупраҡты эшкәртә башлау мөһим.

Иртә ултыртыла торған ҡыяр, помидор үҫентеләренең парниктағы тупраҡ йылылығын тикшереп торорға кәрәк.

Еләктәр иртәрәк өлгөрһөн өсөн уларҙың платанцияларын таҙартып, түтәлдәрен ҡаплап тороу яҡшы булыр.

Апрелдә сәсмәгән - сентябрҙә уңыш йыймаҫ. Апрелгә тәғәйенләнгән эштәрҙе майға ҡалдырырға ярамай. Ҡар ирегәндән һуң тупраҡты ни тиклем иртәрәк йомшартһаң - шул тиклем күберәк дым тотолоп ҡаласаҡ. Ерҙе тулыһынса кипкәс кенә һөрөү, йәки ҡаҙыу файҙалы. Тупраҡ ҡатламы элекке хәленә ҡайтһын өсөн уның тәрәнлеген көҙҙәгегә ҡарағанда ике тапҡырға һайыраҡ ҡаҙырға кәрәк.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ТУПЫЙ,

## йәнә БУТЫЙ

Әсәйем лөғәтендәге "тупый" һүҙенең ҡайһы урында нимә аңлатыуын күптәрҙән һорашып ҡараным. Барыһы ла "әйберҙең тупайып торған урыны, өлөшө" мәғәнәһенән тыш бер ни ҙә әйтә алманы. Беҙҙең яҡта, иһә, ҡәҙимге помидорҙы тупый тип атайҙар. Ҡыҙыҡ. Ә ни өсөн тупый һуң? Тәүге тапҡыр был һүҙҙе әйтеүсе кеше, моғайын, уның тупайып, йомороланып тороу мәғәнәһен нигеҙ итеп алғандыр, тим. Тағы ла ҡыҫҡа буйлы йоморо кешене "тупыс" тип тә әйтәләр. Тупыс һүҙе бармаҡтарға ҡарата ла ҡулланыла. Бигерәк тә сабыйҙарҙың ҡыҫҡа һәм йоморо бармаҡтарын "тупыс бармаҡлы" тиҙәр. Йоморо баш кейемен "тупый" тип әйтеүселәр ҙә бар.

"Тупый"ға оҡшаш "бутый" һүҙен күп урындарҙа ҡулланалар. Уның нигеҙе ябай ғына - "боти" йәғни "ботинки" һүҙе. Аяҡ кейемен аңлата булыр был һүҙ. Беҙҙең яҡта һәр бер ботинканы бутый тимәйҙәр. Бутыйҙың тышы сепрәк йә замш материал менән көпләнгән була.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

АҠЫЛ – ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАМСЫЛАМА

## сыбыҡ менән һуҡ...

Изге кеше һорағандан күберәк эшләй, аҡыллы кеше һорағандан иртәрәк эшләп ҡуя.

**(А. Брейтер).**

Үҙ фекерең булыуы һәйбәт инде ул... әгәр уны һинән һорамаһалар.

**(Билдәһеҙ автор).**

Сыбыҡ менән генә һуҡтырыуға лайыҡ булғанды ҡамсы менән ярма.

**(Гораций).**

Һәләтһеҙ кешеләр, ғәҙәттә, иң талапсан тәнҡитсе булараҡ сығыш яһай. Үҙҙәре мөмкин булғандың иң ябайын да эшләй алмаһа ла, башҡаларҙан мөмкин булмағанды талап итеүсәндәр.

**(Василий Ключевский, тарихсы).**

Король Чинг-Чангтың ваннаһына ошондай һүҙҙәр уйып яҙылған булған: "Үҙеңде көн һайын яңынан камиллаштыр, быны ҡабат-ҡабат, ҡабат-ҡабат эшлә".

**(Ҡытай аҡылы).**

Минең һинең фекерең менән риза булмауым да мөмкин, әммә мин һинең үҙ фекереңде әйтеү хоҡуғың өсөн ғүмеремде бирергә әҙермен.

**(Вольтер).**

Беҙ ваҡиғалар менән идара итә алмайбыҙ, ә уларға яраҡлаша ғына алабыҙ икәнде хәтерҙән сығармаҫҡа кәрәк.

**(Эпиктет).**

Насар ҡылыҡтарың язаһыҙ ҡала алмай, сөнки насар ҡылыҡлы булыу үҙе үк яза.

**(Боэций, Рим фәлсәфәсеһе).**

Уйҙарыңа - ҡунаҡҡа ҡараған кеүек, теләктәреңә балаларыңа ҡараған кеүек мөнәсәбәттә бул.

**(Ҡытай аҡылы).**

Бер генә изге эш тә хөкөм ителмәй ҡалмай.

**(Марк Твен).**

Ҡурҡаҡ етәксенең үҙ-үҙенә әйткәне: "Уйлама! Уй килгән икән - әйтмә! Әйткәнһең икән - яҙып ҡуйма! Яҙып ҡуйғанһың икән - ҡултамғаңды һалма! Ҡултамға һалғанһың икән - баш тарт! Иң яҡшыһы - уйлама!"

**( Сергей Федоров).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ҡоштар үҙҙәренә батша һайларға була. Тәхет өсөн көрәштең иң ҡыҙған мәлендә павлин һүҙ ала: "Минең иҫ киткес матурлығым үҙе үк бары тик минең генә батша булырға хоҡуғым барлығын раҫлай", - ти ул. Уның менән барыһы ла ризалаша. Шул саҡ павлин эргәһенә һайыҫҡан килә һәм: "Әйтәйек, һин беҙҙең батша булдың, ти. Ләкин бөркөт һөжүм итһә, һин беҙҙе нисек яҡларһың?" - тип һорай. Урынлы һорау бирә һайыҫҡан. Үҙен яҡлай алмағандар башҡаларҙы нисек яҡлаһын?!".**

**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:** Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте «Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәрририәт:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТҠУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, 2**53-25-44, 272-89-09, 273-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 2**53-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү танытлығы №7 –1675.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды, (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

Тиражы - 6004
Заказ 1693